*"Ҡатындарҙың алдаҡсы һәм хәйләкәр, мәкерле булыуының төп сәбәбе - ирҙәрҙер. Уның холҡон боҙоусы, ысын кешелектән сығарыусы ла ирҙәрелер. Шуның өсөн ҡатынығыҙҙы тәрбиәләгәндә уларҙы алдаҡсы, мәкерле-фәлән тип һөйләмәгеҙ. Иң тәүҙә үҙегеҙ яҡшы булығыҙ, һуңынан ҡатындарығыҙға яҡшы тәрбиә бирегеҙ. Ҡатындарығыҙ, һис шикһеҙ, яҡшы булыр. Ирҙәр боҙоҡ булмаһа, ҡатындар яҡшы булыр".*

***РИЗАИТДИН** нәсихәттәренән.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№47 (621)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Гел яҡшы уйҙа бул -**



сәләмәтлек нигеҙе шул

6

**Бейеүҙәрем менән...**



халҡымдың рухын күтәрәйем, тим

8-9

**Нәсүр Йөрөшбаев:**



"Фестивалгә ышанысым ҙур"

11,16

**Бер эскесе лә...**



балаһы нәфрәтенән ҡотола алмай

12-13

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Башҡортостан телевидениеһын ҡарайһығыҙмы? Ҡайһы каналдарҙың ниндәй тапшырыуҙары оҡшай? Тағы ла ниндәй программалар күрергә теләр инегеҙ?

***Альбина ИСХАҠОВА, хеҙмәт ветераны:*** "Тамыр" каналы тапшырыуҙарын бик яратам. Элек ул студия рәүешендә эшләгән саҡта үткәрелгән юбилей кисәләрен ҡабат-ҡабат ҡарайым, һис тә ялҡытмай. Бик талантлы балалар үҫеүенә ҡыуанам. Башҡортостан телевидениеһының ошо йүнәлештәге эше баһалап бөткөһөҙ. Күпме таланттар үҫтереп сығарҙы ул үҙ ғүмерендә! Бынан тыш, юлдаш телевидениеһының тарихҡа арналған тапшырыуҙары оҡшай. Билдәле журналист, тарихсы Салауат Хәмиҙуллиндың мәғлүмәтлелегенә, төплө фекерләү ҡеүәһенә һоҡланам, артабан да уға ижади уңыштар теләйем. Даими ҡарап бара алмаһам да, "Замандаштар" хаҡында ла йылы һүҙҙәр генә әйтер инем. Ә бына журналистар Гүзәл Хәмитова менән Булат Кәримовтың Башҡортостаныбыҙҙың уникаль мәмерйәләре, тау-урмандары буйлап сәйәхәт сәхифәләре - "Эҙәрмәндәр" экспедицияһын айырым билдәләп китмәү мөмкин түгел. Бик файҙалы, иҫ киткес һоҡланғыс программа, сөнки республикабыҙҙың бөтөн булған тәбиғәт мөйөштәренә лә, йыйына һалып, сәфәр сығып китеп булмай. Икенсенән, был махсус әҙерлеге булмаған һәүәҫкәр туристар өсөн хәүефле лә, ә бына тапшырыу беҙгә Башҡортостандың иҫ киткес бай ҙа, ҡырыҫ та тәбиғәте серҙәрен асып бирә, рәхмәт! "Байыҡ"ты ҡарап барырға тырышам, "Башҡорт йыры"н да ҡарайым, тик унда ҡатнашыусыларҙың ҡайһы саҡта ниндәйҙер бер көнләк, ни моңо, ни һүҙе йөрәккә үтеп инмәгән йырҙар башҡарыуы күңелде ҡыра. Үҙҙәрен композитор тип йөрөтөүселәр күбәйҙе шул, ә йыр юҡ.

Һуңғы һорауығыҙҙы биреп, йәтеш иттегеҙ. Әйтәйем әле: мин үҙебеҙҙең телевидениела һәүәҫкәр баҡсасылар өсөн тапшырыу булыуын бик теләр инем. Махсус анкета үткәрелһә, бындай теләк белдереүсе бер мин генә булмаҫ инемдер ул, сөнки кешенең баҡсаһы бар, ә уны нисек итеп дөрөҫ файҙаланыу серҙәрен барыһы ла, бигерәк тә йәш баҡсасылар, белеп бөтөрмәй.

Икенсе бер теләгем: кешеләрҙе әҙәп-әхлаҡҡа саҡырыусы ниндәйҙер махсус тапшырыуҙар булыуын теләр инем. Ҡыҫҡа ғына сюжеттарға ҡоролған роликтармы ул, әллә етем балалар, ҡарттар йорттарынан репортаж рәүешендәме - уныһы журналистарҙың үҙ ҡарамағында.

***Миҙхәт ШӘРИПОВ, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Гел генә телевизор алдында ла ултырып булмай, шуға күрә, дөйөм баһа биреүҙән йырағыраҡ тороп, үҙем ҡараған тапшырыуҙар буйынса ғына фекерҙәремде әйтмәксемен. Сағыу тамаша булараҡ, шулай уҡ ябай телевизор ҡараусылар ҡатнашлығында үткәнгәме, "Алтын тирмә" тапшырыуы ҡыҙыҡ тойола. Уның форматын үҙгәртеп, һәйбәт эшләнеләр. Фәһемле, файҙалы проект, тип уйлайым: күберәк белергә һәм уҡырға теләк тыуҙыра, уйланырға мәжбүр итә. Ҡайһы саҡ таныштарҙы күреп тә ҡыуанаһың. "Ауылыма ҡайтам..." проекты тәүҙәрәк шулай уҡ ҡыҙыҡ ине, аҙаҡҡа табан уның бер төрлөлөгө ялҡыта башланы - тимәк, тапшырыу сигенә яҡынлашты, тигән һүҙҙер был, күрәһең. Әйтәһе һүҙ әйтелде, тигәндәй. Ә бына бөгөнгө ауыл тормошо, уның иҡтисады хаҡында етди, проблемалы тапшырыуҙар ҡарағы килә. Ни менән йәшәй бөгөн ауыл? Фермерлыҡ эшмәкәрлеге ниндәй этапта? Республиканың көнбайыш төбәге буйынса үҙ хәбәрсе булараҡ, миңә төрлө райондарҙағы хәл-торошто башҡа сығанаҡтарҙан да белеп тороу бик мөһим. Үҙемә йыш булырға тура килгән Шаран районынан аталы-уллы фермер Наумовтар хаҡында гәзиттә бер нисә мәҡәләм сыҡты: быйыл улар гектарынан 500 центнер сөгөлдөр үҫтереп алды, ләкин был хаҡта телевидениела, хәтерем яңылышмаһа, тапшырыу булманымы, күрмәйерәк ҡалдыммы... Ә бит телевидение эш тәжрибәләре менән уртаҡлашыуҙың бик отошло юлы, сөнки гәзитте күптәр алдырмай, ә телевизор - һәр өйҙә. Һәм, ғөмүмән, заманыбыҙға хас көнүҙәк проблемалар оператив яҡтыртылып барһа ине, тигән теләк бар. Әлеге ваҡытта, мәҫәлән, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү, пенсия реформаһы кеүек мәсьәләләр халыҡта күп һорауҙар тыуҙыра. Ер пайҙары менән дә аныҡлыҡ юҡ - ошо теманы ла ситләтеп үтмәһен ине телевидение. Әйткәндәй, ошо йәһәттән йәш журналист Зөлфиә Рәхмәтуллинаның тапшырыуҙарын билдәләп китер инем. Мәсьәләне тиҙ генә тотоп алыуы, актуаль һорауҙар ҡуя белеүе оҡшай миңә. "Туҡта әле, ана, Зөлфиә һөйләй", тип , хатта 85 йәшлек атайым да яҡыныраҡ күсеп ултырып ҡарай "Телеүҙәк" программаһын.

Башҡорт телендәге яңылыҡтар сығарылышына бер аҙ дәғүәләрем бар. Республикабыҙ географияһына тигеҙ ҡараш бүленә, тип әйтеп булмай. Октябрьский, Салауат, Сибай, Баймаҡ һәм башҡа шундай бәләкәй ҡалаларҙан, төпкөлөрәк райондарҙан хәбәрҙәр аҙ бирелә, ә бит һуң унда ла беҙҙең халыҡ йәшәй. Әйтеүемсә, телевизор һәр бер йортта түрҙән урын алып ултыра - тимәк, тележурналист һүҙе халыҡҡа яҡыныраҡ, ул тиҙерәк барып етә, шуға күрә уның йоғонтоһо ла көслөрәк. Программалар, проекттар эшләгәндә ошоно бер генә минутҡа ла иҫтән сығармаһындар ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ПЕКИНДА - ӨС КӨН



**Пекинда Халыҡ-ара ENACTUS - 2014 студенттар хәрәкәтенең донъя Кубогы тамамланды. Унда АҠШ, Канада, Франция, Германия, Ҡытай, Мексика, Марокко кеүек бөтәһе 34 илдең бизнес буйынса вәкилдәре ҡатнашты. Жюри составында KPMG, Pepsico, Coca-cola, Univer һәм башҡа шундай билдәле милли һәм халыҡ-ара корпорациялар етәкселәре бар ине.**

**(Дауамы 4-се биттә).**

*✓ Иң яратып ҡараған тапшырыуҙарым тип мин "Хазина", "Алтын тирмә", "Автограф"ты әйтер инем. Ғөмүмән, башҡорт шағирҙарының иң матур, көслө әҫәрҙәрен билдәле артистарыбыҙ тасуири уҡыныҡдар ине, тигән теләгем бар.*



ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Башҡортостан телевидениеһын ҡарайһығыҙмы? Ҡайһы каналдарҙың ниндәй тапшырыуҙары оҡшай? Тағы ла ниндәй программалар күрергә теләр инегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Фәүзиә УСМАНОВА, скульптор, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы:*** БСТ тапшырыуҙарын һайлап ҡына ҡарайым. Көн оҙоно балалар тапшырыуҙары бара, рәхәтләнеп мультфильмдар ҡарайым. Улар шул беҙҙең һымаҡ өйҙә ултырған пенсионерҙарға тәғәйенләнгәндер инде, сөнки балалар көнө буйы йә мәктәптә, йә баҡсала. Төштән һуң уҡығандары иһә көндөҙ дәрес әҙерләй - тимәк, улар бөтөнләй ҡарай алмай булып сыға инде был мультиктарҙы. Иң яратып ҡараған тапшырыуҙарым тип мин "Хазина", "Алтын тирмә", "Автограф"ты әйтер инем. Ғөмүмән, башҡорт шағирҙарының иң матур, көслө әҫәрҙәрен билдәле артистарыбыҙ тасуири уҡыныҡдар ине, тигән теләгем бар. Ә бына башҡортса спектаклдәрҙең төн уртаһына ҡуйылыуына аптырарға тура килә. Һуңғы аҙналарҙың БСТ программаһына күҙ һалығыҙ әле: М. Кәримдең "Ай тотолған төндә", Н. Асанбаевтың "Ҡыҙыл паша", Т. Ғәниеваның "Тамарис", Н. Ғәйетбайҙың "Йөрәк ҡартаймай", Х. Ибраһимовтың "Башмағым", Т.Миннуллин һәм башҡа авторҙарҙың пьесалары буйынса спектаклдәр төнгө сәғәт 02.45 минутҡа ҡуйылған. Шунан, хәҙер йоҡламаҫҡа ҡушамы инде беҙгә телевидение? Дөрөҫ, был сәхнә әҫәрҙәрен ҡарамаған кеше ҡалмағандыр, ләкин уларҙы нисә ҡабатлаһаң да ялҡытмай. Пенсионер, йорт хужабикәләре эшкә ашыҡмаһа ла, былдай төн уртаһындағы программа сәләмәтлек файҙаһына түгел бит. Футбол менән хоккейҙы төнгә ҡуйыуҙы мин аңлар инем, мәҫәлән, сөнки унан фанаттар тәүлек әйләнәһенә айырыла алмай. Ошо хаҡта һөйләшәйем, тип, телевидениеға шылтыратып та ҡарайым, ләкин унда ултырған секретарь ҡыҙ хужалар менән тоташтырырға теләмәй.

Яңылыҡтарҙы мин хәҙер ҡарамаҫҡа тырышам, сөнки көн һайын, сәғәт һайын Украинаны һөйләйҙәр, әйтерһең дә, донъяла башҡа проблема ҡалмаған. Унан ҡала - енәйәт, юл-транспорт фажиғәләре, башҡа үлтерештәр...Тамам аптырағас, күршеләр нисек йәшәй икән, тип, ТНВ каналын асам. Бына, исмаһам, милләте рухын күтәрә, үҫтерә белә улар! Бер-береһен күтәрмәләп, самаһыҙ маҡташыуҙарын оҡшатмайынса, бер мәл ҡарамай ҙа башлағайным, хәҙер иһә уларҙан көнләшеп асмайым каналдарын...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА** яҙып алды.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТОТОРОҠЛОҠ - ҮҪЕШ БИЛДӘҺЕ

**Ғәли ВӘЛИУЛЛИН, БР Милли музейының генераль директоры:** Белеүебеҙсә, һәр алға киткән илдең бүтәндәрҙән төп өҫтөнлөгө - тотороҡлолоҡ. Ниндәй өлкәлә күпме үҙгәрештәр индерелһә лә, дәүләттең нигеҙен тәшкил иткән закондар үҙгәрешһеҙ ҡала. Бына шул тотороҡлолоҡ урындағы халыҡта киләсәктә барыһы ла яҡшы булырына, хөкүмәт вәкилдәренә ҡарата ышаныс тыуҙыра. Йәмғиәттең үҫеш нигеҙендә лә тотороҡлолоҡ ята. Был ныҡлы нигеҙгә хатта донъя кимәлендә барған ҙур иҡтисади, сәйәси үҙгәрештәр, яңы закондар ҙа йоғонто яһай алмай. Әгәр ҙә тотороҡлолоҡ һаҡланһа, ҡабул ителгән яңы закондарҙың, ниндәйҙер өлкәләгә үҙгәрештәр, ҡарарҙарҙың яҡшы-насар, ярашлы-ярашһыҙ булыуы ғына илдәге хәлдәрҙе ҡапыл үҙгәртеп ебәрә алмай. Һалым тураһында яңы закон яҙыла икән, ул йәмғиәттәге һәр ҡатлам кешеләренең хәлен иҫәпкә алып төҙәлергә тейеш. Шул осраҡта Рәсәйҙә 400 меңгә яҡын бәләкәй эшҡыуарҙар эшһеҙ ҡалмаҫ ине, тип уйлайым.

Ә шулай ҙа, йәмғиәттәге тотороҡлолоҡ хөкүмәт сәйәси төркөмдәр мәнфәғәтенә ҡарағанда халыҡ мәнфәғәтен өҫтөн ҡуйған хәлдә генә барлыҡҡа киләләр. Беҙҙең илдә һуңғы йылдарҙа ниндәйҙер кимәлдә ошо тотороҡлолоҡто булдырырға тырышалар, әммә әле барыһы ла шыма ғына бармай. Шулай ҙа киләсәктә яңынан ҙур үҙгәртеп ҡороуҙар булмаһа, халыҡ мәнфәғәтендә эшләнгән закондар һәүетемсә генә тормошҡа ашырылһа, йәмғиәттә яйлап тотороҡлолоҡ урынлашыр, тип уйлайым.

**Сәриә ҒАРИПОВА** яҙып алды.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле бара. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлологон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тин**гә яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән **50673** индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

**Августа, сентябрҙә, октябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ:**

● Йылайыр районы Һултантимер ауылынан Зөһрә Янчурина, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Х. Ерьесов, Ярат ауылынан Әнүәр Мырҙабулатов, Мәләүез ҡалаһынан Фәүзиә Йәрмөхәмәтова, Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Вилдан Шәрипов, Миәкә районы Ҡырғыҙ Миәкә ауылынан Фаил Шәймәрҙәнов - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**,

● Бүҙәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан Ришат Юнысов, Баймаҡ районы Урғаҙы ауылынан Мәхмүтйән Йәрмөхәмәтов, Учалы районы Бәләкәй Муйнаҡ ауылынан Закир Лоҡманов, Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан Нәғимә Илһамова, Ишембай ҡалаһынан Фәүзиә Аҡколова, Иглин районы Иглин ауылынан Фәрит Таңғатаров - **С. Руденконың "Башкиры"**;

● Баймаҡ районы Ишей ауылынан Зәкиә Кәримова, Октябрь ауылынан Нуретдин Яҙыҡбаев, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Гөлмаһира Кирәева, Ишембай ҡалаһынан Рауил Әхмәров, Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Рәйфә Вәлиева, Учалы районы Абҙаҡ ауылынан Әнисә Камалетдинова - **"История башкирского народа"**;



● Бишбүләк районы Елбулаҡтамаҡ ауылынан Фәниә Ғатауллина, Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, Шүлгә ауылынан Юламан Раев, Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылынан Кәримә Төхфәтуллина, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Ғәлимйән Бәхтигәрәев, Сынтимер Сафин, Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылынан Роза Насирова, Мәләүез ҡалаһынан Роза Хазиева, Әбйәлил районы Байым ауылынан Әнүәрә Хәйбуллина, Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғоманова, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Линира Ғәзизова, Красноусол ауылынан М. Фәтхезаманов, Бөрйән районы Ҡолғона ауылынан Ш. Нуритдинова, Мәләүез районы Арыҫлан ауылынан Ғ. Камалетдинов, Юмаҡ ауылынан Мәүсилә Булгакова, Межгорье ҡалаһынан Фәнүзә Әкҫәнова, Ишембай районы Һайран ауылынан Ғәлимйән Яҡупов, Этҡол ауылынан Вадим Килсурин, Ишәй ауылынан Әсмә Сәғәҙәтова, Баймаҡ ҡалаһынан М. Байрамғолов, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Сәмғиә Насипова, Күгәрсен районы Мәксүт ауылынан Юлиә Вафина, Өфө ҡалаһынан Зарифа Ҡарабаева, Бүҙәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан М. Шәғәлиева - **башҡортса "Дини календарь"**;

● Ғафури районы Ҡауарҙы ауылынан Таһура Байназарова, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан М. Ишкилдин, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Фәһимә Дилмөхәмәтова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Абдуллина, Әбйәлил районы Салауат ауылынан Мәрхәбә Аҫылгужина, Таҡһыр ауылынан Булат Кәримов - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китабына лайыҡ булды.

Был китаптар ноябрҙә, декабрҙә гәзитебеҙгә яҙҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән башҡа уҡыусыларыбыҙ өләшенә лә сығыуы бик ихтимал.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Стәрлебаш ауылында ауыл биләмәләре башлыҡтары, район Советы депутаттары һәм активы менән осрашыу уҙғарҙы. Һөйләшеү барышында ул һаулыҡ һаҡлау, балалар үлеме, мәғариф проблемаларына, еңелтеселекте һәм ғаиләләр тарҡалыуын иҫкәртеүгә күберәк иғтибар бүлергә саҡырҙы. Республика Президенты шулай уҡ һуңғы ике-өс йылда ауыл хужалығын техника, ҡоралдар менән тәьмин итеп, яңы программалар булдырып хәлдә яҡшыртып булыуын билдәләне, санкциялар менән бәйле мәсьәләләрҙе лә ҡуҙғатты.

✓Башҡортостан Республикаһы буйынса Баш федераль инспектор Андрей Чечеватов РФ мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, Юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин менән эшлекле осрашыу уҙғарҙы. Һөйләшеү Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының тарихи резиденцияһында үтте, унда инспектор танышыу визиты менән барҙы. Әңгәмәләшеү барышында Рәсәй мосолмандар мөхитендә йәмғиәттең рухи-әхлаҡи яңырыуы, экстремизм менән көрәшеү өлкәһендәге артабанғы хеҙмәттәшлек менән бәйле киң мәсьәләләр теҙмәһе тикшерелде.

✓Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы тыл эшсәндәренә һәйкәл Өфөнөң Еңеү паркында 2015 йылдың сентябрендә барлыҡҡа киләсәк. Был хаҡта Еңеүҙең 70 йыллығына әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса республика ойоштороу комитеты рәйесе Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Шул ваҡытта Өфөлә Рәсәй-Ҡаҙағстан форумы уҙасаҡ. Төбәк етәксеһе фекеренсә, дәүләттәр башлыҡтары мемориалды асыу тантанаһында ҡатнаша аласаҡ. Әле Мәҙәниәт министрлығы иң яҡшы һәйкәл проектына асыҡ конкурс иғлан иткән.

✓2015 йылда Башҡортостанда йәшәүсе Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға федераль субвенциялар күләме 1,572 миллиард һум тәшкил итәсәк. Һуңғы ике йылда 2275 ветерандың торлаҡ шарттары яҡшыртылған. 1 ноябргә ҡарата торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға сиратта 1786 кеше тора, өҫтәүенә уларҙың һаны ай һайын арта бара. 2015 йылда бүленәсәк сараларға тик 1304 кешене генә торлаҡ менән тәьмин итеп буласаҡ.

✓ ***Инде иркен һулап, тын алам, тигәндә генә баш өҫтөндә тағын бер туҡмаҡ күтәрелде: хәҙер ... сүп-сар эшкәртеү өсөн дә коммуналь түләүҙәрҙе 10-15 процентҡа арттырмаҡсылар! Быныһы инде бөтөнләй хаттин ашыу тип атала.***



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ХЕТ ҠАЛАНЫ ТАШЛАП ҠАС...



**Ҡасандыр, ҡалала йәшәүе рәхәт, тигәндәрен йыш ишетергә тура килә торғайны. Эйе, дөрөҫлөк булған был һүҙҙәрҙә. Әммә хәҙер беҙгә, ҡалала йәшәүселәргә, киреһенсә, ауыл халҡынан көнләшергә тура килә: саф һауа, иркенлек, экологик таҙа ризыҡ, һөт, ит, картуф-йәшелсә артынан баҙарға сапмайһың һәм, һуңғы ваҡыт иң сығырҙан сығарған, иңгә таш булып ятҡан, осоҡырыйы күренмәгән түләүҙәрҙән азатһың.**

Кемгә нисектер, ә миңә "ЖКХ" тигән ошо өс хәреф иң алама һүгенеү һүҙе, хөкүмәттең беҙҙең биткә төкөрөүе булып күренә башланы. Әле яңы ғына ҡала йорттарында капиталь ремонт өсөн тигән һылтау менән торлаҡ- коммуналь хеҙмәттәргә түләү арттырылғайны. Дөрөҫөн әйткәндә, күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр ун йылға бер подъезд стеналарын буяп сығыуҙан башҡа капиталь ремонттың ни икәнен дә белмәне. Ғөмүмән, ә нимә һуң ул капиталь ремонт? Юғары ҡаттағыларға түшәмдән һыу үтә икән, тимәк, уның өсөн беренсе ҡатта йәшәүсе пенсионер аҡсаһын сығарып һалырға тейешме? Подъезд ишектәре - тимерҙән, иҙәнстеналар, шөкөр, мәңгелек таштан - ай һайын ниндәй ремонт өсөн түләйәсәкбеҙ һуң? Һыу, йылылыҡ торбалары ғүмерҙә яңыртылғаны юҡ. Алмаштырған хәлдә лә - фатир хужаһы иҫәбенә генә. Хәйер, әле уйланырға һуң инде, беҙҙән был статья өсөн ҡайырып аҡса түләтә башланылар ҙа.

Инде иркен һулап, тын алам, тигәндә генә баш өҫтөндә тағын бер туҡмаҡ күтәрелде: хәҙер ... сүп-сар эшкәртеү өсөн дә коммуналь түләүҙәрҙе 10-15 процентҡа арттырмаҡсылар! Быныһы инде бөтөнләй хаттин ашыу тип атала. Дөрөҫ, әлегә ҡулланыу һәм етештереү ҡалдыҡтары тураһындағы закон проекты Дәүләт Думаһына икенсе уҡыу өсөн әҙерләнә, ләкин уның ҡабул ителерендә шик юҡ: ил президенты йыл аҙағына тиклем был законды ҡабул итергә ҡуша. Коммуналь хеҙмәттәргә түләү һалынған квитанцияла "Сүп-сар сығарыу" тигән пунктҡа түләү генә етмәй, беҙ хәҙер фатирҙа йәшәгән кеше һанынан сығып, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын туплау, ташыу, эшкәртеү, кәрәк икән, уны зарарһыҙландырыу өсөн дә һуңғы тиндәребеҙҙе сығарып һалырға тейешбеҙ.

Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө донъяла һәр кем - үҙе өсөн икән, тимәк, ҡулланыусы сүп-сар сығарыу өсөн түләй һәм шуның менән эше лә бөтә, ә полигонға илтеп ауҙарылған сүп-сарҙы утилләштереү эшмәкәрлеге дәүләт көйләүендә булырға тейешле йәки ул ошо мәсьәлә менән шөғөлләнеүсе бизнес-предприятиеның төп бурысы. Магазиндан полиэтилен, быяла йә пластик ҡап һәм һауыттарға тултырылған тауар һатып алғанда ҡулланыусы "экологик сбор" түләй икән, аҙаҡ килеп, уны сүп-сар контейнерына ташлау өсөн тағы бер тапҡыр түләргә тейеш буламы? О-о, бының өсөн миллионер уҡ булмаһаң да, кәмендә депутаттың эш хаҡына эйә булыу кәрәк, валлаһи! Ә ҡайҙа һуң күрәләтә ана шундай - бер өлөшө сүп-сарҙан торған тауарҙарҙы етештереүселәр? Эшмәкәрлектәренең ахырғы эҙемтәһе экологик зыян менән бәйле икән, уларға ла бит ниндәйҙер күләмдә санкция һалынырға тейеш!

Халҡын бурыс һаҙлығына батырырҙан алда дәүләт үҙ бурысын да онотоп ебәрмәһен. Ҡайтарып түләү өсөн ябай ҡулланыусы лайыҡлы хеҙмәт хаҡы, лайыҡлы пенсияға эйә булырға тейештер бит, ниһайәт. Ғәҙәттә, алырҙан алда биреренде уйла, тиҙәрме? Юғиһә "бер ҡапҡаға уйын" тамам ялҡытты, хет ҡаланы ташлап ҡас!

**Фәрит ИШБИРҘИН,**
**хеҙмәт ветераны.**

# МОТЛАҠ, ТИГӘНЕ...
## ситлек була түгелме?



**Ниндәйҙер бер гәзиттә ҡыҫҡа ғына, ләкин ҡыҙыҡ һәм тос йөкмәткеле мәҡәлә уҡығайным. Уның исемен дә, үкенескә күрә, авторын да хәтерләмәйем. Унда ҡасандыр, ә, бәлки, быуаттар буйына кемдәрҙер тарафынан тормош рәүешенә әйләндерелгән һәм кешелекте ана шул сиктәр (йәки - ситлектәр) эсенә ҡыуып индергән стереотиптар, яҙылмаған ҡанундар буйынса йәшәү рәүеше хаҡында бара ине.**

Кеше иректе булырға тейеш, тип ҡарала, әммә, икенсе яҡтан, йәмғиәттә йәшәп, иректе булып булмай, тигән ҡанатлы һүҙҙәр шундуҡ иҫкә килеп төшә. Әлбиттә, кеше донъяға тыуа, ниндәйҙер тәрбиә алып үҫә, белем ала һәм шул осор буйына уның аңына әлеге сикләүтыйыуҙар, яҙылмаған ҡанундар ҙа һеңдерелә бара: мәҫәлән, һин мотлаҡ юғары белемгә эйә булырға, ғаилә ҡорорға, балалар үҫтерергә, уларҙы аяҡҡа баҫтырыу өсөн эшләргә, ул ғына ла түгел, бөтөн ғүмереңде, һаулығыңды ҡорбан итергә тейешһең һәм башҡалар... Был һүҙҙәремдән һуң тура һыҙған юлдан барыусы дөрөҫ уйлыларҙың нисек итеп миңә ябырыласаҡтарын асыҡ күҙ алдына килтерәм: өҙгөсләп, тунап ташлаясаҡтар, билләһи... Эйе, килешәм, ата-бабаларыбыҙҙан да алдараҡ әлеге ғәмәлдәрҙе үтәргә, йәғни үҫеп еткәс, мотлаҡ өйләнергә йә кейәүгә сығырға, тормош юлдашың кем һәм ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, түҙеп йәшәргә, күү-үп итеп бала табырға, бәлки, Аллаһы Тәғәлә үҙе ҡушҡандыр. Яңғыҙлыҡ та рәхәт түгел - быныһы ла аңлашыла. Шул уҡ ваҡытта, яңғыҙ тороп ҡалмайым, тип, ирһеҙ бала тапҡан ҡатындарҙы уйнашсыға тиңләү ҙә дөрөҫ һымаҡ. Ләкин былар бит бөтәһе лә әлеге стереотип, ҡалып буйынса фекерләү һөҙөмтәһе булып тойолмаймы һеҙгә? Ә бына кейәүгә сыҡмай ҡартайған бер ҡарт ҡыҙ күңеле күпкә кешелеклерәк күренде миңә, сөнки мин уның ҡалып эсендәге кеше түгеллеген аңланым. "Тыумаған баламды ҡыҙғандым, уны бынауы мәхшәр донъянан аралап ҡалайым, тип тапманым. Үҙебеҙ интегеп йәшәү ҙә еткән, ниңә сабыйҙарҙы күрәләтә тормош упҡынына ташларға? Ғүмереңде ирһеҙ заяға үткәрәһең, тип әйтеүселәр менән дә килешмәйем - ир көйөн көйләгем, ғүмер буйы уға хеҙмәтсе булып йәшәгем килмәй", - тип өнһөҙ ҡалдырғайны бер мәл...

Юҡ, мин бер кемде лә кейәүгә сыҡмаҫҡа, бала тапмаҫҡа өгөтләмәйем, ләкин яҙмыш ҡушыуы буйынса йәки бәхетһеҙ булғаны өсөн түгел, ә үҙенең инаныуы, теләге буйынса әлеге "ситлеккә" инмәй ҡалғандарҙы битәрләүгә, уларға аҡыл өйрәтеүгә ҡаршымын. Ҡалыпҡа һалынған тормошто мин кеше иркен сикләү тип ҡабул итәм һәм уның "мотлаҡ"тары менән килешмәйем! Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Мәрйәм ДӘҮЛӘТКИЛДИНА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# УРТАҠ ТЕЛ ТАПТЫМ...

"Киске Өфө"нө беренсе тапҡыр ҡулыма алып уҡып сыҡҡандан алып ғүмерлек дуҫым һәм кәңәшсем иттем. Гәзит, журналдар - кешеләр кеүек. Кемеһелер менән беренсе осрашыуҙа уҡ уртаҡ тел табып, оҙайлы ваҡытҡа үҙеңдең әңгәмәләшең итәһең. Ә икенселәрен, нисек кенә тырышһаң да, күңеленә яҡынатып булмай.

Эскерһеҙ, ғәҙел, кешелекле булыуы, тормошобоҙҙоң күп яҡтарын төрлө яҡлап яҡтыртыуы менән күңелемә яҡын "Киске Өфө". Һәр битенән изгелек, оптимистик рух, халыҡсанлыҡ, әҙәплелек, намыҫлылыҡ, йылы бөркөлөп торған гәзит һәр өйҙә аҙна һайын көтөп алынған ҡәҙерле һәм яҡын туғанылай булыуына шикләнмәйем.

Матур телдә яҙылған баҫманы уҡып сығыу үҙе бер ҡыуаныс. Гәзиттә һәр кем, ниндәй йәштә булыуына, ҡайҙа йәшәүенә, кем булып эшләүенә ҡарамаҫтан, үҙенә файҙалы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт таба. Үҙем, тарих уҡытыусыһы булараҡ, бер дәресҡә лә "Киске Өфө"һөҙ инмәйем, сөнки унда баҫылған тарихи мәғлүмәттәр менән уҡыусыларымды таныштырыуҙы үҙемдең бурысым тип һанайым. Баҫманың халҡыбыҙға ҡағылышлы бай, йөкмәткеле мәҡәләләрҙе бер урынға туплап бирә барыуы оло хуплауға лайыҡ. Уның артабан да кәрәкле, ҡәҙерле һәм абруйлы баҫма булып ҡалыуын теләйем.

**Рөстәм ШӘЙӘХМӘТОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

# МИН "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ МОХТАЖ!

Бөгөн замандаштарҙың гәзит-журнал, китапты һирәк уҡыуын беләбеҙ. Күптән түгел, хатта яңы ғына хәреф танырға өйрәнеп йөрөгән ейәнсәрем аптыраште ҡалдырҙы. "Өләсәй, китапта нимә яҙыла?" - тип һорай. "Китаптарҙа бик күп нәмәләр тураһында уҡырға була. Төрлө әкиәттәр, хикәйәләр, беҙ белмәгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр яҙыла", - тип аңлатам. "Улай булғас, мин китап уҡымайым. Мин әкиәттәргә мохтаж түгел!" - тип яуап бирмәһенме, бер мәл ҡыҙыҡай. Уның "мохтаж" һүҙен белеүенә ғәжәпләнергәме, әллә нисек фекер йөрөтөүенәме?

Тимәк, замандаштар ҙа ошо бәләкәй ҡыҙ әкиәткә мохтаж булмаған кеүек, мәғлүмәтле булыуға мохтажлыҡ кисермәй килеп сыға. Әммә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылмаған милләттәштәр өҫтәүенә фекер, аҡыл, белем, рухи байлыҡ туплауға ла мохтаж түгел, ахыры. Сөнки был гәзит үҙ уҡыусыларын мәғлүмәтте уҡып белеп, хәбәрҙар булып ултырыуҙан тыш, уйланырға, кәрәк урында фәһем алырға, хәтер һандығына һалып ҡуйырға, үҙ асылыбыҙға ҡайтырға өндәй. Үҙем халыҡ йыйылған урынға, төрлө сараларға барыр алдынан һәр ваҡыт "Киске Өфө"нөң яңы һанын уҡып сығам - ваҡытын тура килтереп, унда яҙылған тос фекерҙәр, күтәрелгән һорауҙар буйынса һөйләшеп алыу өсөн шулай эшләйем. Бөгөнгө көндә беҙҙең өсөн йәштәребеҙҙе уйларға, милләт һәм ил мәнфәғәттәрен ҡайғыртырға өйрәтеү бик мөһим, ә "Киске Өфө" гәзите был йәһәттән иң тәү булып юл ярыусы баҫма.

**Хәнифә ӘБҮБӘКИРОВА.**
**Әбйәлил районы Үтәгән ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Яҡын арала Өфө эргәһендә республикала етештерелгән аҙыҡ-түлек тауарҙарын һатыу буйынса логистика үҙәге төҙөлә башлаясаҡ. Был хаҡта Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Сельская жизнь" гәзитенә биргән интервьюла хәбәр итә. Рөстәм Хәмитовтың фекеренсә, Өфө эргәһендә күмәртә-бүлеү үҙәген төҙөү кәрәклеге географик яҡтан алдан билдәләнгән: республика илдең логистика схемаһында мөһим урынды биләй.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә баш ҡаланың төп Яңы йыл шыршыһын ҡуйҙылар. Ул үҙенең почетлы урынын Ленин исемендәге үҙәк ҡала майҙанында биләне. Йәшел урман һылыуҡайының бейеклеге 30 метр тәшкил итә. Ғәҙәттәгесә, Өфөлә Яңы йылда күмәкләп күңел асыу өсөн ике төп майҙансыҡ әҙерләнәсәк: Ленин исемендәге майҙанда үҙәк баш ҡала шыршыһы һәм Конгресс-холл алдындағы майҙанда.

✓Башҡортостандың 15 меңдән ашыу сығарылыш уҡыусыһы 20 ноябрҙә һынау иншаһы яҙҙы. Был һынау 2014/2015 уҡыу йылынан алып мәктәптең сығарылыш уҡыусылары өсөн мотлаҡҡа әйләнде. Ошо эш һөҙөмтәһе буйынса уҡыусыларға дәүләт имтиханын тапшырыуға рөхсәт биреү хәл ителәсәк. Йомғаҡлау иншаһын уҡыусылар 3 декабрҙә яҙасаҡ.

✓Мәхмүт Ҡашғари исемендәге III халыҡ-ара хикәйәләр бәйгеһенең төбәк этабы еңеүселәренең исемдәре билдәле булды. XI-XII быуаттың атаҡлы төрөк филологы һәм һүҙлексеһе исемен йөрөткән әҙәби конкурста Башҡортостандан 33 автор ҡатнашты. Жюри уларҙың бишәүһен һайлап алды. Улар араһында "Француз" хикәйәһе менән шағирә Тамара Ғәниева өсөнсө урынды яуланы. Икенсе урында - Сибайҙан Миләүшә Ҡаһарманова. Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлнур Аҙнабаева беренсе урынға лайыҡ булды.

✓Башҡортостандың Сәнәғәт һәм инновацион сәйәсәт министрлығында Бөтә донъя сифат көнөнә арналған конференция уҙҙы, унда "Рәсәйҙең йөҙ иң яҡшы тауары" конкурсы еңеүселәрен иғлан иттеләр. 46 предприятие иҫәбендә юғары наградаға конкурста йыл һайын ҡатнашып килгән, туғыҙынсы тапҡыр уның лауреаты булған "Янғантау" шифаханаһы дәүләт унитар предприятиеһы лайыҡ булды. Шифахана үҫешенең ыңғай динамикаһы, иҡтисадтың төрлө өлкәләрендәге ҡаҙаныштары "Сифат гарантияһы" номинацияһы менән билдәләнде.

**"Башинформ"дан.**

✓ - Һәйбәт идея, ләкин ул саҡта бөтөн алкоголде махсус магазиндарға күсерергә кәрәктер? - тигән фекерҙә Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш наркологы Евгений Брюн.



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ВАҠЫТ БАР ӘЛЕ

**Федераль закон нигеҙҙәренә индерелгән үҙгәрештәр менән бәйле, пенсияны дәүләт финанслауы программаһында ҡатнашыу өсөн ғариза биреү - ошо йылдың 31 декабренә, ә уны активлаштырыу өсөн тәүге иғанә түләү ваҡыты 2015 йылдың 31 ғинуарына тиклем оҙайтылды.**

**Программала ҡатнашыусыларҙың быны алдараҡ - 2009-2014 йылдарҙа эшләмәгәндәре лә ошо ваҡыт эсендә тәүге иғанәне түләй ала.**

Законға ярашлы, дәүләт йыл һайын граждан тарафынан тәүге иғанә түләнгән ваҡыттан алып йылына 2 меңдән 12 мең һумға тиклем Программала ҡатнашыусы һәр кемдең шәхси иғанәһен финанслауҙы дауам итә. Шулай итеп, Программала ҡатнашыусыларға 2015 йылда дәүләт финанслауына иҫәп тотоу өсөн ағымдағы йылда 2 меңдән 12 мең һумға тиклем аҡса түләп ҡуйыу кәрәк.

2014 йылда ғариза яҙған граждандар был осорға ниндәй ҙә булһа төр пенсия ала икән (хәрби пенсионерҙар һәм уларға тиңләштерелгән кешеләрҙән башҡа), улар иғанәләренең дәүләт тарафынан финансланмаясағын белергә тейеш. Пенсия тупланмаһынан, шул иҫәптән Пенсияны финанслау программаһы сиктәрендә тупланған аҡсанан, бер тапҡыр түләү тәғәйенләүҙе һорап мөрәжәғәт итеү ваҡыты ла үҙгәрҙе.

Башҡортостан Республикаһы буйынса РФ Пенсия фонды идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, бөгөнгө көнгә республикала Дәүләт финанслауы программаһы эшләй башлағандан алып унда 400 мең кеше ҡатнашты һәм 1 миллиард 148 мең һум аҡса күсерҙе, шуның 158 миллиондан ашыуын - 2014 йылда.

Пенсияны дәүләт финанслауы программаһы хаҡындаентеклерәк мәғлүмәттәрҙе түләүһеҙ әйләнәһенә бушлай эшләүсе 8 800 510-55-55 телефоны буйынса алырға мөмкин.

**БР буйынса РФ Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

## АРАҠЫНЫ - КӘШТӘ АҪТЫНА!

**Дәүләт Думаһы депутаттары "Этил спирты етештереү һәм уның әйләнешен дәүләт көйләүе тураһында" законға төҙәтмәләр индерҙе һәм араҡыны кәштә аҫтына йәшерергә кәрәк, тигән ҡарарға килде.**

Был яңылыҡ һатыусыларҙы, тәмәке менән булған хәлгә оҡшаш рәүештә, араҡы шешәләрен дә кәштәләрҙән аҫкараҡ алып ҡуйырға мәжбүр итәсәк. Юғиһә, кеше магазинға, әйтәйек, икмәк һатып алырға тип килә лә, йылтырашып ултырған "матур" шешәләрҙе күреп, үҙен тыя алмай - араҡы ла һатып ала, әммә ул быны аңлы рәүештә эшләмәй, тип аңлата төҙәтеүҙәрҙең авторҙары.

- Һәйбәт идея, ләкин ул саҡта бөтөн алкоголде махсус магазиндарға күсерергә кәрәктер? - тигән фекерҙә Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш наркологы Евгений Брюн. - Беҙҙең халыҡтың эскегә бәйлелеген, бәлки, ошондай юл менән кәметеп булыр.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ПЕКИНДА - ӨС КӨН

**(Башы 1-се биттә).**

Рәсәй намыҫын яҡлау бурысы Башҡорт Дәүләт университетының Сибай институты командаһы - ENACTUS- 2014 Милли ярыштар чемпионы иңенә төштө. 2008 йылда ла институттың иҡтисад факультеты студенттары Сингапурҙа Рәсәй исеменән сығыш яһағайны.

Конкурстың тәүге көнө ҙур йәрминкә менән асылып китте - унда һәр команда үҙ илен һәм командаһын инглиз телендә таныштырырға тейеш булды. Һәр команда үҙ иленең милли кейемдәрендә йырлап-бейеп, халыҡ музыка ҡоралдарында уйнап, бында йыйылған халыҡты килтергән күстәнәстәре - милли тәм-том менән һыйланы, сувенирҙар таратты, шулай уҡ халыҡ йолалары һәм традициялары менән дә таныштырҙы. Шул уҡ көндә ярыштарҙы асыу тантанаһы булды.

Күңелдәрҙе ярһытып, тулҡынландырғаны икенсе көндә - проекттарҙы ҡарау булды: ярышта ҡатнашыусылар 4-5 команданан торған 8 лигаға бүленде.Һәр бер залда сығыштарҙы абруйлы жюри ағзалары - халыҡ-ара корпорациялар президенттары һәм топ-менеджерҙары диҡҡәт менән күҙәтеп, баһалар бирә барҙы. Беҙҙең лигаға ингән Ҡытай, Марокко, Рәсәй һәм Нидерландтарҙан финалға тәүге ике ил командаһы сыҡты һәм Кубокты Ҡытай командаһы яуланы. Беҙҙән лига иң көслөһө тип танылды. Шулай итеп, өс көндөң үтеп киткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды, ләкин ул беҙҙең күңелдәрҙә юйылмаҫ сағыу тәьҫораттар ҡалдырҙы. Донъя кимәлендәге ошондай юғары форумда ҡатнашыуыбыҙ Сибай институтында алған белемдең, унда эшләүсе уҡытыусыларыбыҙҙың да юғары кимәле хаҡында һөйләүсе абруйлы бер дәлил булды.

Командабыҙға ошондай аралашыу мөмкинлеге биргәндәре өсөн беҙ Рәсәй Enactus Президенты С. Равичевҡа, БДУ-ның Сибай институты директоры З. Йәрмөхәмәтовҡа, иҡтисад факультеты деканы Н. Фәтҡуллинаға, команда кураторы У. Барлыбаевҡа һәм бөтөн уҡытыусылар коллективына, шулай уҡ бағыусыларыбыҙға оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

**Рәүилә ХӘСӘНОВА, БДУ-ның Сибай институты матбуғат хеҙмәте етәксеһе.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЕТЕМДӘРҘЕҢ ХӘЛЕНӘ...

## аңлап баҡ!

**Башҡортостан Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам фонды ойоштарған "Төрлө балалар ҙа мөһим!" тип аталған Бөтә Рәсәй конкурсында он-лайн тауыш биреү буйынса беренсе урын яуланы. Бишенсе тапҡыр уҙғарылған сарала РФ-ның 53 субъектынан 161 ҡала ҡатнашты.**

Өфө тәҡдим иткән модель балалар менән ҡанһыҙ, шәфҡәтһеҙ мөғәмәлә осрағы асыҡланған ваҡытта ведомство-ара белгестәренең бер төптән эшләүен күҙаллай. Был системаға Опека һәм попечителлек органдары, балиғ булмағандарҙың эше һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса комиссиялар, психологик-педагогик һәм медицина-социаль ярҙам үҙәктәре, мәғариф, дауалау ойошмалары һәм Өфө Йәмәғәт именлеге үҙәгенең балиғ булмағандарҙың хоҡуҡ боҙоуҙарын иҫкәртеү бүлектәре, шулай уҡ ғаиләләргә кәрәкле булған халыҡты социаль хеҙмәтләндереүҙең комплексы үҙәктәре, мәшғүллек үҙәктәре һәм башҡа хеҙмәттәр инә.

Ғаиләлә именлек булмауҙы иртә асыҡлау системаһында опека һәм попечителлек органдарының айырым вәкәләттәрен үҙҙәренә алған ойошмалар ҙур роль уйнай. Бөгөн баш ҡалала уларҙың һаны 416-ға етә, улар иҫәбендә - мәктәптәр, балалар баҡсалары, поликлиникалар, социаль-психологик үҙәктәр.

Әлеге ваҡытта Опека һәм попечителлек идаралығы вәкәләтле хеҙмәттәр белгестәренең эшмәкәрлеге һөҙөмтәһен күтәреү буйынса әүҙем эшләй. Социаль етемлекте иҫкәртеү буйынса мәрхәмәтлек фонды (Мәскәү ҡалаһы) менән хеҙмәттәшлек сиктәрендә йыл башынан алып үткәрелгән семинар-тренингтарҙа 600 белгес белемен камиллаштырған. Шулай уҡ балаларҙы туғандарының ғаиләләренә биреү һәм уларҙың артабанғы яҙмышын күҙәтеп тороу ҙа мөһим йүнәлештәрҙең береһе. Йыл башынан ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған шундай 222 бала асыҡлана. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда, был 30 процентҡа кәмерәк.

Йылдан-йыл үҙ ата-әсәһенә ҡайтарылған балалар һаны арта. Уртаса алғанда, 50-70 бала үҙ ғаиләһенә ҡайта. Бала ғаиләгә ҡайтарылғас, артабанғы ике йыл дауамында ул комплексы күҙәтеү аҫтында була. Психологтар уларҙың үҫеш мониторингын тикшерә. Мотлаҡ рәүештә бала һәм ғаилә өсөн реабилитация планы төҙелә. Ошо осор дауамында ғаиләгә юридик ярҙам, психолог, логопед һәм дефектолог ярҙамы күрһәтелә. Социаль педагог даими рәүештә ғаиләгә килеп, баланың йәшәү һәм тәрбиә шарттарын, белгестәр биргән күрһәтмәләрҙең үтәлешен тикшереп тора.

Яңы тыуған сабыйҙарҙан баш тартыуҙы иҫкәртеү йүнәлешендә лә ҙур эш башҡарыла, берҙәм ҡала хеҙмәте булдырылған. Бөгөнгө һәр өсөнсө ҡатын-ҡыҙ бала тыуыуға бәйле ҡарашын үҙгәртә һәм яңы граждаға үҙ ғаиләһендә тәрбиәләнеү мөмкинлеген бирә. Бала табыу йорттарында яңы тыуған балаларҙан баш тартыу кимәле үткән йылдар менән сағыштырғанда 30 проценттан 50 процентҡаса кәмегән.

Ысынбарлыҡ шундай: ун баланың һигеҙе ата-әсәләре иҫән булып та етемлеккә дусар. Һәм быңдай үҫеш илдең күпселек төбәктәренә хас. Шуға күрә лә баш ҡаланың опека һәм попечителлек органдары эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлеше булып социаль етемлекте иҫкәртеү тора һәм ул артабан да дауам ителәсәк.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Нефтекамала йәшәүсе эшҡыуар Аладдин Самедов "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын әзербайжан теленә тәржемә иткән. Әлеге ваҡытта Нефтекама нәшриәттәренең береһендә китаптың сигнал экземпляры баҫылған. Аладдин Самедов шиғри тәржемә өҫтөндә эшләүен дауам итә. Ул майҙа Өфөлә, республиканың башҡа ҡалаларында һәм уның сиктәрендә уҙған "Урал батыр" флешмобында, "Башҡорт телен өйрәнәм" телевизион проектында ҡатнашты.

✓Төньяҡ Кипрҙағы Гирне (Кирения) ҡалаһында IV Төрки телле илдәр һәм берләшмәләр медиа-форумы булып үтте. Форум Төркиә Республикаһы Премьер-министры Аппараты ҡарамағындағы Баш матбуғат һәм мәғлүмәт идаралығы тарафынан ойошторолдо. Форумда 150-ләп делегат ҡатнашты. Рәсәй исеменән төрки телле республикалар - Башҡортостан, Татарстан, Ҡабарҙы-Балкар, Дағстан, Яҡут, Ҡарасәй-Черкес, Тыва журналистары, шул иҫәптән "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының баш мөхәррире урынбаҫары Алик Шакиров һәм мәҙәниәт буйынса күҙәтеүсе Ләйлә Аралбаева ҡатнашты.

✓Өфөлә 1 декабрҙән алып трамвай һәм троллейбустарҙа юл йөрөү хаҡы артасаҡ. Билет хаҡы 12-нән 15 һумға күтәреләсәк. Ҡулаҡса менән түләгәнгә ҡарағанда электрон пластик карта буйынса12 һумға йөрөү осһоҙраҡ буласаҡ. Карталары булған кешеләргә уны алмаштырырға кәрәкмәй. Бынан тыш, Өфө ҡалаһының Муниципаль электр транспорты идаралығында хатта бөгөнгө хаҡтар менән сағыштырмаса юл хаҡын кәметеү мөмкинлеге биреүсе төрлө тариф пландары әҙерләнәләр.

✓27 ноябрь Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана "Китап" нәшриәтендә донъя күргән "Биҙәктәр" тип аталған яңы китаптың презентацияһы була. Йыйынтыҡҡа Х. Алтынбаева, Д. Амангилдин, М. Баймөхәмәтова, А. Басирова, Г. Исмәғилева, Б. Йософова, Т. Кейекбаева, М. Кәримов, Ф. Ҡотлошин, З. Сөләймәновтың шиғырҙары һәм хикәйәләре индерелгән. Шулай уҡ Р. Камаловтың "Кеше драмаһы" һәм Р. Мифтаховтың "Саҡма осҡондары" китаптары тәҡдим ителәсәк. Башлана 12.00 сәғәттә.

✓Фәрит Ғәбитов Башҡортостан Республикаһы Кинематографтар союзы рәйесе итеп һайланды. Ҡарар БР Кинематографтар союзының отчет-яңынан һайлау йыйылышында ҡабул ителде. Фәрит Ғәбитов республиканың иң әүҙем кино эшмәкәрҙәренең береһе булараҡ билдәле, кинопрокат тармағында етәкселек тәжрибәһенә эйә.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

**Күптәр мәктәп эскәмйәһенән үк героиндың кешене биш йыл эсендә һәләк итеүе хаҡында белә. Хәҙерге быуын иһә дезоморфин ҡулланыусыларҙың бер йылда юҡҡа сығыуы хаҡында хәбәрҙар. Әммә күпселек әле һаман яңы наркотиктарҙың һәм тартыу ҡатнашмаларының ни тиклем хәүефле булыуы хаҡында белеп бөтмәй. Йәмғәтселектә лә улар етди хәүеф тыуҙырмай.**

# ҺАТЫП АЛЫНҒАН АҒЫУ



Ә хәүефләнергә урын бар, сөнки быңдай наркотиктарҙы беренсе тапҡыр ҡулланыу ҙа үлемесле булыуы мөмкин, ә инде сәләмәтлеккә килтерелгән зыян һәм шунда уҡ бәйлелек барлыҡҡа килеүе хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Һуңғы йылдарҙа илебеҙҙә наркобаҙарҙың синтетик наркотиктар сығарыуҙы арттырыуға йөҙ тотоуы күҙәтелә. Быңдай тиҙлеккә уларҙың аналогтарының тиҙ синтезлашыуы мөмкинлек бирә. 2011 йылда наркотик һәм психотроп матдәләрҙең аналогы, йәки яһалмалары булған 700 төр матдә контролгә алынған. Һуңғы ете йылда Рәсәйҙә тартып алынған синтетик наркотиктарҙың күләме 130 тапҡырға артып, 165 килограмдан 22 тоннаға еткән.

Сентябрь һуңында бөтөн илде ҡайһы бер төбәктәрҙә кеше ғүмерен өҙгән яңы психоактив матдәләр менән ағыуланыу осраҡтары тетрәндерҙе. Тиҫтәләрсә үсмерҙә үҙәк нервылар системаһына ауыр тәьҫир яһаусы билдәләр табылды. Медицина ярҙамына мөрәжәғәт итеүселәр тартыу ҡатнашмаларын ҡулланыуҙары хаҡында әйтте.

Һәләкәттәр медицинаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, октябрь һуңына Өфөлә психоактив матдәләр ҡулланып ағыуланған 70 осраҡ теркәлә. Шуларҙың 32-һендә үсмерҙәр ағыулана. 20 кеше дауаханаларға һалына, шул иҫәптән - 14 бала. Ҡалғандары амбулатор дауаланыу ала.

Баш ҡалала наркотик афәтенә ҡаршы етди профилактик эш алып барыла. 10 ай эсендә муниципаль медицина ойошмалары тарафынан наркоманлыҡты, алкоголизмды һәм тәмәке тартыуҙы иҫкәртеү буйынса 9 890 лекция, 22 738 әңгәмә үткәрелә, 132 санитар бюллетень сығарыла, 290 сәләмәтлек мөйөшө, һорау-яуап стендтары һәм таҡталары эшләнә, радиола, матбуғат баҫмаларында 55 сығыш яһала. Ләкин афәт йәмғиәтебеҙгә ҙур тиҙлектә үтеп инеп бара.

Әгәр балалар йәки үсмерҙәр аратирә наркотик матдә ҡуллана икән, быны тәү ҡараштан уҡ асыҡлау еңел түгел. Әммә иғтибар бүлергә кәрәкле ҡайһы бер билдәләр бар. Уларҙың ҡайһы берҙәре бөтөнләй икенсе сәбәп буйынса барлыҡҡа килеүе мөмкин, шулай ҙа иғтибарлы булырға кәрәк.

**Физиологик билдәләр:**

- тире ағара йәки ҡыҙара;
- күҙҙәр ҙур асыла йәки ҡыҫыла, ҡыҙара йәки тоноҡлана;
- телмәр бәйләнешһеҙгә әйләнә, аҡрын йәки тиҙ була;
- аппетит юғала, ябыҡтыра йәки аҙыҡ саманан тыш ҡулланыла;
- хроник йүтәл барлыҡҡа килә;
- ҡан баҫымы ҡапыл һикерә;
- ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеге боҙола.

**Ҡылыҡ билдәләре:**

- сәбәпһеҙгә ҡыҙып китеү, хәлһеҙлек;
- битарафлыҡ, хәтерҙең һәм иғтибарҙың кәмеүе;
- өйҙән китеү, балаларҙың сәбәпһеҙгә мәктәпкә йөрөмәүе;
- ниндәйҙер аныҡ нәмәгә иғтибар туплау;
- йоҡоһоҙлоҡ йәки йоҡо баҫыу;
- тәнкитте ауыр ҡабул итеү, кәйефтең йыш һәм ҡапыл үҙгәреүе;
- быҒаса яҡын булған кешеләр менән аралашыуҙан ҡасыу;
- финанс сығымдарының артыуы;
- йорттан ҡиммәтле әйберҙәрҙең юғалыуы;
- бик йыш шылтыратыуҙар, жаргон ҡулланыу, серле һөйләшеүҙәр;
- үҙ-үҙенә бикләнеү, быға тиклем ҡыҙыҡлы булған эштәрҙән ҡасыу;
- йыш алдашыу, сослоҡ;
- тура бирелгән һорауҙарҙан ҡасыу, уйҙырмалар уйлап сығарыуға әүәҫлек;
- насар ҡиәфәт.

**Күҙгә ташланып торған билдәләр:**

- энә ҡаҙалған эҙ, бигерәк тә веналарҙа, күгәргән, киҫелгән урындар;
- торба итеп төрөлгән ҡағыҙҙар йәки аҡса;
- ыҫланған ҡалаҡтар, фольга;
- капсулалар, бәләкәй шешәләр, ҡалай банкалар;
- йоҡлатыусы йәки тынысландырыусы дарыуҙар ҡабы;
- сигарет ҡаптарындағы тәмәке;
- киптерелгән үләндәр, төрлө төҫтәге дарыуҙар.

Наркотик иҫереү алкоголь ҡулланып иҫергән тороштo хәтерләтә, әммә ауыҙҙан еҫ сыҡмай. Быңдай иҫереүҙең дөйөм билдәһе булып күтәренке күңел, фекерләүҙең аҡрынайыуы йәки шәбәйеүе ҡатыш ләззәтләнеү тора. Иҫерек кеше йөнлө, күңелсәк, аралашыусан, күп һөйләүсән, ҡыҫҡырып һөйләшеүсән, нығыш була. Әммә быңдай кәйефтең ҡапыл ҡәнәғәтһеҙлеккә әүерелеүе мөмкин. Ҡайһы бер осраҡта фекерләү, мускул реакцияһы тотҡарланыуы ихтимал, ҡатып ҡалыу, тулыһынса ысынбарлыҡтан айырылыу, үҙҙәренә мөрәжәғәт итеүгә иғтибар булмауы.

Яҡын кешегеҙҙең, туғанығыҙҙың, балағыҙҙың наркотик бәйлелеге асыҡлана икән, уға ҡаршы яңғыҙығыҙ ғына көрәшмәгеҙ. Был сирҙән ғаилә сере яһамағыҙ, сүпте урамға сығарыуҙан ҡурҡмағыҙ, ярҙам һорап белгестәргә мөрәжәғәт итегеҙ.

КӨНАУАЗ

# ЕЛ ҠАЙҺЫ ЯҠТАН ИҪӘ?



**Доллар, евро һәм һум тирәһендә барған ваҡиғалар бөтә иҡтисади йәмғиәтте көсөргәнештә тота. Ә "ҡара алтын"ға хаҡтың тоторокһоҙ булыуы был усаҡҡа ҡуҙ ғына өҫтәй. Донъяның атаҡлы иҡтисадсылары артабанғы хәлдәрҙең ни рәүешле ҡуйырасағы хаҡында төрлө фараздар ҡора һәм тиҙ үҙгәреүсән финанс мөхиттә нисек итеп "һыу өҫтөндә" ҡалыу юлдарын барлай.**

Ай башында Ҡытайҙың Пекин ҡалаһында үткән конференцияға йыйылған эксперттар, мәҫәлән, быны донъяла яңы финанс тәртибе булдырыуҙа күрә. Улар фекеренсә, әлеге ваҡыттағы халыҡ-ара финанс система ғәмәлдән сыға бара һәм донъяның яңы ҡағыҙәләренә һәм талаптарына яуап бирә алмай. "Бөгөнгө көндә донъя революция тупһаһы алдында тора. Беҙгә глобаль финанс структура төҙөү өсөн яңы ҡағиҙәләр формалаштырыу мөһим", тине үҙ сығышында форумдың рәйесе Чэн Сивэй. Рәсәй Ҡытай һәм БРИКС-тың башҡа илдәре менән берлектә әлеге ваҡыттағы финанс структураға параллель итеп яңы глобаль финанс структура төҙөү эшен башланы ла инде, тип әйтергә була. Мәҫәлән, Ҡытай бер йыл элек Бөтә донъя банкы һәм Халыҡ-ара валюта фонды кеүек үк функциялар башҡарған яңы глобаль банк булдырҙы. Ә Рәсәй, ҡасандыр үтеп булмаҫтай тойолған доллар ҡыҫымын ярып сығып, нефтте һәм газды һатыуҙы-һатып алыуҙы һумдарҙа һәм юандәрҙә башҡарыу яйын тапты. Шуға күрә, был структураның Көнбайыштың доллар ярҙамында контролдә тотҡан структураға лайыҡлы конкурент булып бара икәнлеген бер кем дә инҡар итмәйҙер, моғайын.

Бөгөнгө финанс системаның емерелеү юлында икәнен яҡшы аңлаған күпселек иҡтисадсылар яңы сценарий өҫтөндә әле үк әүҙем эшләй. Улар, башлыса, ваҡиғаларҙың ике юлдан барыуын күҙаллай. Беренсеһе - бөтә донъяны юҡҡа сығыуҙан ҡотҡарып ҡала алыу мөмкинлеге биргән кардиналь реформаның үткәрелеүе. Икенсеһе - бөтә финанс системаның "һүнеп, яңынан тоҡаныуы". Был осраҡта әлеге ваҡытта бөтә донъя иҡтисад дилбегәһен үҙ ҡулында тотҡан бер-нисә эре дәүләт был өлкәләгә хәлде контролдә тотоу хоҡуғын юғалтасаҡ, ә ҡайһы бер көнсығыш дәүләттәр, киреһенсә, яңы системаның төп һәм өҫтөнлөклө уйынсыларына әйләнәсәк. Тимәк, әлеге ваҡытта Рәсәйҙең төп иғтибары ошо тарафҡа йүнәлеүенә һәм мөһим эшлекле проекттарҙың тап көнсығышта төҙөләүенә аптырарға түгел. Алдан күрә белеү һәм елдең ҡайһы яҡтан иҫкәнен тойоу һәләте әлегә бер кемгә лә ҡамасаулағаны юҡ.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Арпа

❖ Иммунитетты нығытыу өсөн көнөнә 2 теш һарымһаҡ ашағыҙ.

❖ Ҡарһаҡ үләненә (очанка) дегәнәк йәки бәйғәмбәр тынағы үләнен ҡушып, төнәтмә яһағыҙ. Еңелсә һыуытығыҙ һәм ике сәғәт һайын күҙҙәргә ошо төнәтмә менән сылатылған компресс эшләгеҙ.

❖ С витамины, балыҡ майы эсегеҙ, улар ҙа инфекцияны еңергә ярҙам итә.

❖ Әгәр ҙә өс көн эсендә күҙҙәге арпа һытылмаһа, мотлаҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шулай уҡ күҙҙәрҙең ҡыҙарыуы, буленеп сыҡҡан эрендең күбәйеүе лә һеҙҙе хәүефләндерергә тейеш.

### Һуған ҡабығы

❖ Күптәр һуғанга ҡарағанда, уның ҡабығы күпкә файҙалыраҡ икәнен белмәйҙер ҙә әле. Ул күп ауырыуҙарҙы дауалауҙа, профилактик саралар үткәргәндә ҡулланыла. Ҡабыҡта С, шулай уҡ А, Е, РР, һәм В төркөмө витаминдары, калий, фосфор, органик кислоталар күп.

❖ Һуған ҡабығы төнәтмәһен түбәндәгесә әҙерләйҙәр: ярты стакан ҡабыҡҡа 5 стакан ҡайнар һыу ҡоялар, 20 минут ҡайнаталар һәм һыуынғас, һөҙәләр.

❖ Атеросклероздан дауаланыу өсөн һуған ҡабығы төнәтмәһе ҡулланыла. 10 көн дауамына 1 ҡалаҡ үсемлек майына 20 тамсы төнәтмә тамыҙырға һәм көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан эсергә.

❖ Танау тоноп, тын алыуы ауырлашһа, һыуға һуған ҡабығы һалып ҡайнатығыҙ һәм уның быуы менән 5 минут тирәһе һулағыҙ.

❖ Ныҡ йүткергән саҡта көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ төнәтмә эсеү ярҙам итер.

❖ Бәүел ҡыуығының лайлалы тиресәһе шешеүенән (цистит) дауа: 2 ҡалаҡ һуған ҡабығын 400 мл һыуҙа ҡайнатырға, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 2 тапҡыр 50 мл эсергә. Дауаланыу курсы - 5 көн. Бик ҡатмарлы, хроник тоҫ алған ауырыуҙы ла дауалай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Ат, тәү сиратта, балаларҙың яҡлаусыһы иҫәпләнгән, ул яңы тыуған сабыйға ныҡлы сәләмәтлек бирә, бала тыуыуға булышлыҡ итә, тип иҫәпләнгән. Йәш балалар үлеме күбәйеп китһә, башҡорттар яңы тыуған баланы атҡа һалған.*

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ЙЫЛҠЫ МАЛЫ...

## халыҡ медицинаһында

**Көнкүреш йолаларында аттың үҙе лә, уның тире, ауыҙынан килгән күбеге, баш, муйын һөйәктәре, тиреһе, ялы, шулай уҡ уға бәйле предметтар - йүгән, ҡамыт, дилбегә, эйәр, ыңғырсаҡ кейеҙе (тирлек), төшөп ҡалған дағаһы, сыбыртҡы ла изгеләштерелгән һәм дауалау сифатына эйә булған.**

Ат, тәү сиратта, балаларҙың яҡлаусыһы иҫәпләнгән, ул яңы тыуған сабыйға ныҡлы сәләмәтлек бирә, бала тыуыуға булышлыҡ итә, тип иҫәпләнгән. Йәш балалар үлеме күбәйеп китһә, башҡорттар яңы тыуған баланы атҡа һалған. Был йола Бурнаҡ хан тыуғанда башҡарылған, имеш. Юрматылар легендаһының бер вариантты, шулай уҡ "Тәтегәс бей" эпосы буйынса, ырыу башлығының берҙән-бер ҡыҙының улы тыуғас, уны морон сите аҡ булған бейәгә һалып, Бурнаҡ ("морон" + "аҡ") тип исем ҡушалар. Был йолала баланың икенсе тапҡыр бейә-тоҡом башлығынан "тыуыуы"н күрәбеҙ.

Был боронғо ҡараштар дауалау сараларында ла сағылыш таба. Йылҡы малының көсөн, сәләмәтлеген балаға күсереү өсөн иртә яҙ, тәүге тапҡыр ҡуҙғалаҡ, ҡыр йыуаһы, ҡымыҙлыҡ ашаған саҡта ҡолон булып кешнәйҙәр. Бала был саҡта атҡа әйләнеп, йыл буйына уның көсө менән йәшәй, тип ышанғандар. Ауырлы ҡатын итәгенә һоло һалып, атҡа ашатһа, балаһы сәләмәт тыуа. Ҡамыт аяҡлы баланы яңы ғына тыуған ҡолондоң аяҡтары араһынан үткәреп, шулай тип һамаҡларға кәрәк: "Бына һинең дуҫишең, уның аяҡтары ла һинеке кеүек, төп-төҙ булһын". Йола башҡарғандан һуң, баланың кейеменә ат ауыҙлығының айылын тегеп ҡуйырға кәрәк. Быума, шулай уҡ бәүел тотмау менән сирләгән баланы тирле ҡамыт аша үткәргәндәр. Ауыҙлыҡ сыҡҡанда йүгән кейеп: "Мин ҡолон булдым, мин ҡолон булдым!" - тип һамаҡлап, өс тапҡыр ат булып кешнәргә кәрәк. Ҡыҙылса һәм башҡа шеш ауырыуҙары мәлендә кешенең тәненә ат тире һөртөү, биҙгәктән тайҙың ҡанын эсереү йәки йылҡы тиреһенә урау, тел-теш баҫыу өсөн (сихыр, яман күҙҙән ҡотолоу өсөн) ҡыҙҙырылған ат дағаһы һыуытылған һыу менән ҡойоноу, оҙаҡ төҙәлгән яраны аттың ауыҙынан килгән күбек менән дауалау ҙа йыш ҡулланылған. Һомайҙың яраһын Һәүбән тап ат күбеге менән дауалай. Бының өсөн рәхмәтле булған Һомай Һәүбәнде үҙенең арҡаһына ултыртып, һыу аҫты батшалығына алып оса, тик осоп барған саҡта уны батырҙың бот ите менән һыйларға кәрәк була. Ботондағы яраларҙы Һәүбән Аҡбуҙаттың ауыҙынан сыҡҡан күбек менән дауалай.

Кеше оҙаҡ йәшәмәгән йортҡа иң тәүҙә атты индереп, ат эскән урындан ғына һыу эсеү иһә уның яман көстәрҙе ҡурҡытыу һәләте менән бәйле. Ышаныуҙар буйынса, ат кешенең тәнендәге яман көстәрҙе лә ҡыуа ала. Быума менән ауырыған кешеләрҙе йәки 6-7 йәшенә тиклем атламаған баланы дауалау өсөн имсе атҡа менеп, ауырыуға ҡарай ҙур тиҙлектә сабып килгән, аттан ҡурҡып, ауырыу баланың тәненән сығып ҡасырға тейеш булған. Бүҫер имләгәндә лә уны тәндән ҡыуғандан һуң, ат булып кешнәйҙәр, бер нисә тапҡыр ауырыуҙың эсен ат булып тешләйҙәр. Ҡырҙа йоҡларға кәрәк булғанда, кеше үҙенең ятҡан ерен ат ялынан үрелгән арҡан менән уратып ятһа, уға йылан да, яуыз көстәр ҙә яҡын килмәй.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

# ГЕЛ ЯҠШЫ УЙҘА БУЛ -

## сәләмәтлек нигеҙе шул

**Бар халыҡтар ҙа борон-борондан йәндең, күңел торошоноң тәнгә туранан-тура йоғонтоһо барлығын яҡшы белгән. Физик тәндә барлыҡҡа килгән һәр ауырыуҙың үҙенең психологик сәбәбе була. Психосоматика тип йөрөтөлгән йүнәлеш тап йән менән тәндең гармонияһы боҙолоуын өйрәнә лә инде. Ошолар тураһында даими авторыбыҙ, психоаналитик, Башҡорт дәүләт университетының өлкән уҡытыусыһы Әлфиә БАЙРАМҒОЛОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**



- Медицина һәм психологияның психосоматика тип аталған йүнәлешенең эшмәкәрлегенә артыҡ туҡталмайынса, шуны әйтергә була: ысынлап та, билдәле бер психологик факторҙар теге йәки был ауырыуҙы барлыҡҡа килтереүҙә үҙенсә роль уйнай. Һин организмыңа ниндәй мөнәсәбәттәһең, ул да һиңә шуның менән яуап бирә, тип бушҡа әйтмәйҙәр бит. Шуға ла сәләмәтлегегеҙ менән проблемалар килеп тыуа икән, уны тәүҙә психикала, йәғни, нескә пландағы тәндәрҙә эҙләргә кәрәк.

Әлбиттә, мин әйткән нәмәләр - абсолют дөрөҫлөк, тип, гәзит уҡыусыларҙы ышандырырға йыйынмайым, шулай ҙа был өлкәлә булған тәжрибәм был тема буйынса уйланырға мәжбүр итә. Мәҫәлән, профессиональ спорт менән шөғөлләнгән сағында тубығын йәрәхәтләгән бер танышым бар ине. Ҙур спорттан китеп, байтаҡ ваҡыт үткәс, уның ошо йәрәхәте тағы аҙып, операция яһанылар. Психосоматика буйынса, тубыҡ ауырыуҙары - ғаиләләге мөнәсәбәттәр, үҙеңдең киләсәгең өсөн хәүефләнеү менән бәйле. Әгәр ҙә һул тубыҡ ауырта икән, ғаиләгеҙҙәге ҡатын-ҡыҙҙар менән мөнәсәбәттәрегеҙ тураһында уйланырға ваҡыт еткән. Был танышым да әсәһе менән бергә йәшәне, ә унан сығып китеү хаҡында уйлана башлағас, ауырыуы тағы көсәйгән булып сыҡты.

Тубыҡ ауырыуҙары күберәк үҙ һүҙле кешеләрҙә осрай. Был тормошта һығылмалы булыу күп күңелһеҙлектәрҙән ҡотҡара, шуға ла үҙегеҙ менән булған, буласаҡ ваҡиғаларҙы контролдә тоторға тырышмағыҙ. Ҡайһы саҡта үҙ фекерегеҙҙе үҙгәртергә лә ярай. Бауыр - асыу, агрессия, үпкәләүҙәрҙе үҙендә туплай, дарыуҙар менән дауаланыуҙан тыш, ҡылыҡтарығыҙҙы һәм тормошҡа ҡарашығыҙҙы яңынан ҡарап сығығыҙ. Һөйәк системаһы сирҙәре барлыҡҡа килгән икән, үҙегеҙгә ышана башларға ваҡыт еткән. Һеҙ үҙегеҙ уйлағандан күпкә көслөрәк, үҙегеҙгә оҡшаған эштәр менән шөғөлләнегеҙ һәм, иң мөһиме, үҙегеҙҙе яратырға өйрәнегеҙ, зинһар! Артрит - нескә планда үҙ-үҙең менән булған конфликтты күрһәтә. Был ауырыу менән, ғәҙәттә, үҙҙәренә ныҡ талапсан кешеләр сирләй. Башҡаларҙан ярҙам һорауҙан тартынмағыҙ, хистәрҙе, хаттар улар кире булғанда ла, үҙегеҙҙә тотмағыҙ. Артроз менән яфаланыусылар башҡаларҙы аңларға өйрәнергә бурыслы.

Бөйөрҙәрҙең төҙөлөшө бик ҡатмарлы, шуға ла улар төрлө характерҙағы проблемалар менән бәйле. Бөйөрҙәр эшмәкәрлеге боҙолоуы үҙ-үҙеңә ышанмауҙы, хис-тойғоларҙың тигеҙлеге юғалыуын белдерә. Ҡағиҙә булараҡ, был кеше үҙенә ҡарағанда башҡалар тураһында күберәк уйлай, сөнки ул булған бар ваҡиғаларҙы ла, кешеләрҙе идеаллаштырыу һәләтенә эйә. Бөйөр йәлләү тойғоһо менән бәйле. Әммә халыҡта башҡаларҙы йәлләп тик йөрөгән кешене ни өсөндөр бауырмал, тип әйтәләр. Йәлләү - яҡшы тойғо түгел. Урамдағы ҡарт ҡына ҡарсыҡты йәлләп, үҙегеҙ ҙә һиҙмәйенсә, үҙегеҙҙе унан өҫтөн ҡуяһығыҙ, тимәк, уны түбәнһетәһегеҙ. Йәлләп түгел, ә уның хәленә инеп, ярҙам итәһегеҙ икән, был дөрөҫ була. Хоҙай Тәғәлә бер кемгә лә үҙе күтәрә алмаған һынау бирмәй. Кеше өсөн кешенең яҙмышын йәшәп тә, уны еңеләйтеп тә булмай. Шуға ла йәлләү тойғоһонан мотлаҡ арынырға кәрәк.

Шешенһәгеҙ, организмда артыҡ һыу йыйылһа, хис-тойғоларығыҙға сығырға ирек бирмәйһегеҙ. Тамағығыҙҙа ниндәйҙер төйөр торамы? Тимәк, унда рәнйеүҙәр, үпкәләүҙәр йәшәй. Хистәрегеҙҙе белдерә алмайһығыҙ икән, уларҙы ҡағыҙға яҙығыҙ ҙа, яндырығыҙ. Тире ауырыуҙары тышҡы донъя менән эске донъя араһындағы конфликт тураһында һөйләй. Башҡалар һеҙҙең турала нимә уйлар, нимә һөйләр тип борсолоуығыҙ урынһыҙ, дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө заманда бер кемдең дә бер кемдә лә эше юҡ. Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусыларҙың күбеһе бала саҡта көслө кәмһетеү кисергән була. Улар, ғәҙәттә, "юҡ", тип әйтә белмәй, артыҡ ауырлығы менән ул үҙен шундай кешеләрҙән һаҡларға ынтыла. Ундайҙар өсөн үҙҙәренең бәхетенә ҡарағанда, башҡаларҙың шатлығы мөһимерәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр ауырыу иң тәүҙә психик планда барлыҡҡа килеүен хәҙер бер кем дә инҡар итмәй. Күңел һыҙлауы физик ауырыуға күсә, насар уйҙар сәләмәтлекте ҡаҡшата. Йәнегеҙ тиҙ көйөп барһа, кәйефегеҙ тиҙ үҙгәреп торһа, оҙаҡ үпкәләһәгеҙ, эргә-тиргеҙҙәге кешеләргә ышанмаһағыҙ, уларҙы барлыҡ бәләләрегеҙҙә ғәйепләһәгеҙ, түбәндәге кәңәштәргә ҡолаҡ һалығыҙ.**

- **Бер ҡасан да күңелһеҙлектәрҙе онотторға тырышмағыҙ. Ул саҡта психологик һаҡ барлыҡҡа килә лә, баш мейеһе был хәүефле мәғлүмәтте юйырға тырышып, уны аңдан физик тәнгә этеп сығара. Шуға ла һәр кис көнө буйы кисергән тойғоларығыҙҙа анализларға өйрәнегеҙ.**
- **Үҙегеҙҙе лә, башҡаларҙы ла нисек бар, шулай ятығыҙ, шул саҡта кире тойғоларҙан ҡотолоуы еңелләшә.**
- **Ауыр саҡта илағыҙ, был саҡта тыйылып ҡалған күҙ йәштәре организмды эстән ашап, иммунитетты ҡаҡшата.**
- **Шулай ҙа психосоматиканың төп ҡағиҙәһе: сәләмәт булғығыҙ килһә, бөтөн нәмә тураһында ла яҡшы уйҙа булығыҙ. Иртән эшкә сығыуығыҙға ҡар урынына ямғыр яуып тора, берәй сәбәбен табып, шатланығыҙ ҙа ҡуйығыҙ. Ыңғай уйҙар гормондар бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, шул саҡта үҙегеҙҙе гел бәхетле итеп тойорһоғоҙ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әҙерләне.**

*ШАҢДАУ*

# "БЕР БАЛА МЕНӘН СИКЛӘНЕҮ...

## инаныуымы, әллә яҙмыш ҡушыуымы?"

**"Киске Өфө" гәзитенең 44-се һанында Зилә Ноғомpraнованың ошондай баш аҫтындағы мәҡәләһен уҡығас, үҙ һүҙҙәремде яҙмай булдыра алманым. Эйе, мин дә Илдар Ғәбитовтың ул мәҡәләһен уҡығас, хәтерем ҡалып йөрөгәйнем, яуап яҙырға ла уйлағайным, форсат табылмағандыр инде. З.Ноғоманова тулыһынса минең әйтер һүҙҙәрҙе яҙған да ҡуйған, рәхмәт уға.**

Мин дә бына үҙ теләгем менән түгел, яҙмыш ҡушыуы буйынса, бер бала менән ҡалдым. Инде балаҡайым иҫән-һау ғына булһын. Яңғыҙ үҫкән балам да, улы булмаған ирем дә йәл. Нисә йылдар ошо яраны йөрәктә йөрөтөүе бер ҙә рәхәт түгел. Кешеләр бит беҙҙә мәҙәниәтһеҙ, тупһыҙ. "Ни эшләп тағы тапмайһың, бер бала - юҡ бала", - тип тә әйтеп китәләр.

Бер ҙә үҙемде насар әсәйгә һанамайым. Һөнәрем абруйлы, насар ғәҙәттәрем юҡ, ғүмерем буйы тәүфиҡле булдым. Эшкә уңғанмын, бөхтәлек, тәртип яратам. Баҡсам гөрләп үҫә, сәскә-гөлдәр яратам, бәйләмен дә бәйләйем, аш-һыуын да әҙерләйем. Йыр-бейеүгә оҫтамын. Ҡыҙымда ла ошо сифаттарҙы тәрбиәләргә тырышам.

Беҙҙең ауылда ла күп балалы, "Әсәлек даны" миҙалы алыусылар бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, береһе лә йүнле әсә түгел. Кисә генә берәүһе урамда эскән килеш осраны (балаһы миндә уҡый). Ныҡ ҡына итеп һөйләштем, ҡулымды ҡыҫып, башҡа эсмәҫкә һүҙ бирҙе, рәхмәт әйтеп хушлашты. Икенсеһе бер йыбытҡы, донъяһын да йыя алмай, балаларын да тәрбиәләй алмай. Өсөнсөһө лә эсә, тәмәке тарта, "кәзә һуҡмағынан" йөрөргә лә аптырамай. Ошолармы һәйбәт әсәләр?

Таныштарым араһында ла бер бала менән йә бөтөнләй балаһыҙ ҡалыусылар байтаҡ. Бөтәһе лә бынамын тигән әсә булырлыҡ ҡатын-ҡыҙҙар. Береһе лә бындай яҙмышты үҙ ирке менән һайламаған, сәбәптәре төрлө-төрлө.

Шулай булғас, хөрмәтле Илдар Ғәбитов ағай, беҙҙең кеүек яҙмышлы ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғәфү үтенерһегеҙ, тип өмөтләнәм. Бынамын тигән әсәләр беҙ! Барыһын да бер ҡалыпҡа һалырға ярамай. Ғөмүмән, беҙҙә шул һан артынан ҡыуырға яраталар инде ул. Иң мөһиме - сифат икәнен ҡасан төшөнөрбөҙ икән?..

**Гөлгөл ӘХМӘРОВА.**
**Мәләүез районы.**

*✓ Беҙ бәшкәрттәргә "Урал батыр" эпосы персонаждарының исемдәрен һанап сыҡҡас, ҡайһы бер персонаждар бәшкәрттәргә таныш булып, уларҙың мәғәнәһен дә аңлатып бирҙеләр.*

СӘЙӘХӘТНАМӘ

**Башҡортостан Республикаһынан бер төркөм ғалимдың Иранда йәшәүсе бәшкәрттәргә сәйәхәте тураһындағы яҙмаларҙы дауам итәбеҙ.**



# БӘШКӘРТ ИЛЕНДӘ

Бәшкәрттәр үҙҙәренең милләте исеменең ҡайҙан, нисек килеп сығыуын аңлата алманы. Бер урындан икенсе урынға даими рәүештә күсенеп йөрөү арҡаһында ошондай исем бирелгән, тип фаразлап ҡуйҙылар. Элек бәшкәрттәр башҡорт тирмәләренә оҡшаш, түңәрәк торлаҡтарҙа йәшәгән. Бәшкәрт телендә ул "гертүп", шулай уҡ "кәпәр" тип атала. Улар бербереһенән формалары буйынса ғына айырыла. Гертүп - беҙҙең төрки тибындағы тирмәләргә оҡшаш, түңәрәк формала. Фарсы теленән тәржемә иткәндә, "герд" - түңәрәк, йоморо, ә "түп" - түбә тигәнгә тап килә. "Гертүптән" айырмалы рәүештә, "кәпәр" формаһы буйынса дүрт мөйөшлө, эҫкерт өйөмөн хәтерләтә. Әгәр ҙә "кәпәр" әле булһа ла осраһа, түңәрәк гертүптәр юғалыу сигендә. Тел белгестәре фараздары буйынса, кәпәр һүҙенең мәғәнәһе ҡаплау, көпләү һүҙҙәренә ҡайтып ҡала. Таш өйҙәре хәҙерге заманға яраҡлаштырып төҙөлгән. Эсе заманса йыһазландырылған. Һәр бер өйҙә һыуытҡыс, кондиционер, интернет бар. Таҙа, бөхтә, матур йәшәйҙәр.

Бәшкәрттәр башлыса малсылыҡ менән шөғөлләнәләр - кәҙә, һарыҡ көтәләр. Элегерәк күпләп ат, дөйә тотҡандар. Алыҫ ергә юлға сыҡҡанда хәле етһен өсөн ишәктәрен финик менән генә туйындырғандар. Һунарсылыҡ та ныҡ таралған булған - ҡыр кәзәләренә, айыуҙарға, пантераға һунар иткәндәр. Һунарға ат менән йөрөгәндәр. Ҡош менән дә һунар иткәндәр. Әле булһа ҡаяларҙа оя ҡорған ҡырағай бал ҡорттарының балдарын йыялар, күпләп финик пальмалары үҫтерәләр. Емеш ағастары булған кеше бай йәки урта хәлле иҫәпләнә.

Бәшкәрттәрҙең тормош-көнкүрештәре тураһында һорашҡанда, улар беҙгә милли көрәштәрен күрһәттеләр, Был көрәш таһлийә тип атала. Башҡа иранлыларҙың көрәшенән ныҡ айырылған был көрәш беҙҙең башҡорт көрәше менән бер тиһәң дә була.

Беҙҙең Урал башҡорттарының теле төрки телдәре төркөмөнә инеүенә ҡарамаҫтан, башҡорт мифологияһы персонаждары, бигерәк тә демонология (аждаһа, дейеү, бире, ен һ.б.ш.), барыһы ла иранилар мифологияһына ҡарай һәм уларҙың материалдары аша аңлатыла. Рәсәйҙең тел белгестәре боронғо башҡорт исемдәренең тамырҙары ираниларҙың ислам диненә тиклемге боронғо дәүерҙәре менән бәйле икәнлеген күптән инде асыҡлаған. Беҙ бәшкәрттәргә "Урал батыр" эпосы персонаждарының исемдәрен һанап сыҡҡас, ҡайһы бер персонаждар бәшкәрттәргә таныш булып, уларҙың мәғәнәһен дә аңлатып бирҙеләр. Мәҫәлән, Ҡатил, Ҡәһҡәһә, Әзрәкә, Зәрҡүм, Самрау, Һомай тигән персонаждарҙы беләләр. Әйтергә кәрәк, хәҙерге заман башҡорт теленән сығып, был мифологик персонаждарҙың исемдәренең мәғәнәһен аңлатып булмай.

Шулай уҡ музыка ҡоралдарында, милли көйҙәрҙә оҡшашлыҡтарға юлыҡтыҡ. Беҙ Иранға үҙебеҙ менән ҡурайҙа уйнаған башҡорттоң боронғо оҙон һәм бейеү көйҙәрен яҙҙырып алып барҙыҡ. Уларҙы тыңлағас, бәшкәрттәр ҡурай тауышында үҙҙәренең "нәй" тигән инструментының тауышын таныны. Үкенескә ҡаршы, был музыка уйын ҡоралында бәшкәрттәр күптән инде уйнамай, шуға ла беҙгә бәшкәрт "нәйен" күрергә яҙманы. Улар фарсы "нәйен" күрһәтте, ләкин үҙҙәренең нәйҙәре фарсыларҙыҡынан әҙерәк айырылыуын билдәләне. Шулай уҡ бәшкәрттәргә үҙҙәренең нәйҙәрендә уйнаған көйҙө тыңлатырға бирҙек. Был көйҙәрҙе 1956 йылда ошо ерҙәргә ғилми экспедиция яһаған инглиз ғалимы И.Гершевич яҙып алған булған. Бәшкәрттәр шунда уҡ көйҙәрен таныны, һәм әллә ҡасан яҙып алынып, хәҙер инде онотолоп бөтөп барған көйҙәрен ишетеүгә шатлыҡтарының сиге юҡ ине. Хатта был инглиз ғалимын хәтерләгән кешеләр ҙә табылды. Шулай уҡ башҡорттарҙың ҡыл-ҡумыҙын хәтерләткән гыджак тигән ҡыллы музыка ҡоралында уйнаған кешене яҙҙырып алдыҡ. Был музыка ҡоралы атамаһы, формаһы һәм уйнау ысыулы буйынса төркмәндәрҙең "гыджагын"ан бер нәмәһе менән дә айырылмай, тип әйтергә була.

Беҙ үҙебеҙ менән Юлай Ғәйнетдиновтың "Хазина" тапшырыуынан башҡорт бейеүҙәрен видеотаҫмаларға яҙҙырып алып барҙыҡ. Әсәһе яғынан бәшкәрт һәм бәшкәрт телен яҡшы белгән беҙҙең информатор Әмин Салариға башҡорт бейеүе "Ҡабырсаҡ"ты күрһәткәс, бейеүҙәйнйы артынан сумыусыларҙың хәрәкәттәрен таныны. Ошондайыраҡ бейеүҙең Һиндостан яғынараҡ диңгеҙ буйында йәшәгән халыҡтарҙа ла булыуын әйтте. Әмин беҙҙең башҡорттар хаҡында бер нәмә лә белмәһә лә, әлеге "Ҡабырсаҡ" бейеүенең беҙ күптән онотҡан мәғәнәһен аңлатып, халҡыбыҙҙың бик боронғо дәүерҙәрҙә ҡалған бәйләнештәрен аңларға мөмкинлек бирҙе. Тимәк, беҙҙең бейеүҙәребеҙҙә халҡыбыҙҙың тарихи үткәне сағылыш тапҡан, һәм уны иғтибарлыраҡ булып, ентекләп өйрәнгәндә, бейеү сәнғәте беҙгә күп нәмә һөйләй ала икән.

Шулай уҡ бәшкәрттәрҙең бик тә үҙенсәлекле кинәйә менән һөйләшеүҙәрен әйтеп китергә кәрәктер. Һорау бирһәләр, һин дә кинәйә менән яуап бирергә тейешһең.

Шуныһы үкенес, бәшкәрт ерендә мотлаҡ эшләргә кәрәк, тип ҡорған пландарыбыҙҙы тулыһынса үтәй алманыҡ. Тағын бер нисә көнгә генә ҡала алһаҡ, бәшкәрттәрҙең иң боронғо һөйләше булған мөлкигал диалекты менән дә яҡынданыраҡ танышырға мөмкин булыр ине. Шулай ҙа, үҙебеҙ менән бик күп материалдар, фильмдар алып ҡайттыҡ. Бәшкәрт режиссеры Хубияр Салари төшөргән фильмдарҙы телевидениенан күрһәтергә ниәтләйбеҙ. Был үҙебеҙҙең телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы дөрөҫ аңлау, төплө өйрәнеү өсөн дә файҙалы булыр ине, Алла бирһә.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**философия фәндәре кандидаты, БР Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының рухи донъя бүлеге мөдире.**
**Зәлифә ӘБҮБӘКИРОВА,**
**Рәсәй Фәндәр академияһының ғилми хеҙмәткәре, фарсы теле буйынса белгес.**

**(Аҙағы. Башы 46-сы һанда).**






БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Мираҫ хоҡуғы мәсьәләһендә тамға ҙур роль уйнай. Тамға - башҡорттарҙың милкенә һуғылған билдә. Улар йәмғиәт йәки ырыу урманында ҡырағай бал ҡорттары күсен йәки солоҡ эшләү өсөн кәрәкле ағас тапһа, уға үҙенең тамғаһын һуға. Артабан был солоҡ ағасы уның милке булып һанала. Башҡорттар шулай уҡ мал-тыуарҙы, һунар, балыҡсылыҡ, умартасылыҡ ҡорамалдарын, көнкүреш мөлкәтен һ.б. тамғалаған. Билдәле бер ваҡытта тамға төрлө рәсми килешеүҙәрҙә һәм документтарҙа ҡултамға урынына ҡулланыла.

Д. Н. Соколов билдәләүенсә, башҡорт тамғаһы - ғаилә милкенең йәки йорт хужаһы милкенең билдәһе. Ысынлап та, көньяҡ һәм үҙәк Башҡортостанда йәшәүсе һәр ғаилә башлығының үҙенең тамғаһы булған. Әммә Соколовтың билдәләмәһе барлыҡ башҡорттарға ла ҡағылмай. Ул тамғаларҙы өйрәнеү һәм уларҙы шул уҡ олоҫтоң йәки ауылдың башҡа тамғалар менән сағыштырыу - башҡорттоң сығышын, йәғни уның ниндәй ҡәбилә-ырыуға ҡарауын асыҡлауҙың берҙәнбер ысулы, ти. Ләкин һәр ерҙә лә башҡорттарҙа тамға Соколов билдәләгән көньяҡ башҡорттарындағы кеүек әһәмиәткә эйә түгел. Төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда XIX быуаттың икенсе яртыһында тамға бөтөнләй ҡулланылыштан сыға. Төньяҡ-көнсығыш, Урал аръяғы Башҡортостанында шәхси тамғалар ҙа, ғаилә тамғалары ла булмай. Балаҡатайҙарҙа, мәҫәлән, "Н" хәрефе формаһында дөйөм бер тамға була һәм ул барлыҡ рәсми документтарҙа ҡултамға урынына ҡуйыла. Бынан тыш, башҡалары ла була, булыуын, әммә улар ике-өс ауылға берәү генә. Тамьян-түңгәүерҙәрҙә һәм күбәләк-теләүҙәрҙә һәр ара һәм ара вәкилдәренең һәр ҡайһыһы бер үк тамғаға эйә. Үҙәк һәм көньяҡ башҡорттарының ғаилә тамғалары бар. Тамғалар даими үҙгәреп тора. Ғаиләнән бер вәкил башҡа сыҡһа, ул ғаилә тамғаһы һалынған милектең бер өлөшөнә эйә була. Ә инде үҙенең милкен атаһының мөлкәтенән айырыр өсөн, ул тамғаға саҡ ҡына үҙгәреш индерә. Д. Соколов күҙәтеүҙәре буйынса, был үҙгәрештәр түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:

1) тоҡом тамғаһына өҫтәмә һыҙыҡтар ҡуйыла;
2) тамға баштүбән әйләндерелә;
3) төп һыҙаттарын һаҡлап, үҙгәртелә;
4) тамға икеләтә арттырыла а) айырым өлөштәрҙең, һыҙаттарҙың ҡушылыу юлы менән; б) бер йәки ике нөктәлә ҡушылыу, был осраҡта симметрия үҙәге тап килә йәки параллель рәүештә ҡуйыла, яңы үҙәккә ҡарата симмтерик рәүештә ҡуйыла; в) тамғаның симметрия үҙәгенә уның кесерәйтелгән варианты урынлаштырыла.
5) төрлө типтағы тамғалар ҡушыла.

Ғаиләлә берҙән-бер малай булғанда йәки башҡа сыҡмаған ул (күп осраҡта иң кесеһе) атаһының тамғаһын үҙгәрешһеҙ ҡабул итә. Әлбиттә, быуындан-быуынға тапшырыла килеп, тамғалар ҡатмарлы һәм билдәләүе ауыр булған форма алған. Төп йәки айырым араларҙың тамғалары бик ябай һәм күпселек осраҡта атама менән йөрөтөлә: һәнәк, ҡабырға, таяҡ, сүкеш, йәйә, көйәнтә, даға, ай һ.б. Ҡайһы берҙә бер үк тамға төрлө ырыуҙарҙа төрлө атама менән йөрөй.

*✓ Милли ерлек, халыҡсанлыҡ юғалыр, тип ҡурҡырға кәрәкмәй. Бейеүҙә мөһим урынды музыка алып тора, ул милли рух, милли колорит бирә. Шуға ла мин, мәҫәлән, бейеүҙәремдә тик башҡорт халыҡ көйҙәренә һалам.*



# БЕЙЕҮҘӘРЕМ МЕНӘН...

## халҡымдың рухын күтәрәйем, тим

**Бейеү - ул халыҡтың күңеле. Башҡорт профессиональ хореографияһының нигеҙен булдырыусы Фәйзи Ғәскәров ошо ябай ғына хәҡиҡәтте аңлауы менән дә бәхетле ижадсы булғандыр, моғайын. Донъялағы сәхнә ҡалыптарынан тайпылып, бейеү ябай тамашасыға ҡыҙыҡлы һәм аңлайышлы, ихлас булһын һәм, иң мөһиме, унда халыҡ күңеле сағылһын, тигән оло бурыстар йөкмәгән бөгөнгө ҡунағыбыҙ ҙа ижады менән үҙенә-үҙе һәйкәл ҡуйған шәхес. "Еҙ үксә", шулай уҡ күптән түгел баш ҡалала үткән "Башҡорт йөрәге" I Төбәк-ара башҡорт бейеүе фестивалендә күрһәтелгән "Тархандар" бейеүе генә лә был фекерҙең хаҡлығын раҫлай. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Риф ҒӘБИТОВ менән әңгәмәбеҙ башҡорт бейеүе өсөн мөһим ваҡиғаларҙың береһе булған ошо фестиваль һәм, ғөмүмән, бейеү тураһында булыр.**

### "Башҡорт йөрәге"

Үткән быуаттың 90-сы йылдар башына тиклем республикала бер генә профессиональ бейеү коллективы - Ф. Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт академик ансамбле булды. Әлеге мәлдә иһә алты профессиональ бейеү ансамбле бар, уларҙың барыһы ла тиерлек илдәге үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуң барлыҡҡа килгәйне. Тимәк, беҙгә хәҙер үҙ-ара ярышыу, уныштар менән уртаҡлашыу өсөн бер майҙанға йыйылырға ла була. Ошолар тураһында уйлаштыҡ та, "Башҡорт йөрәге" тип аталған фестиваль ойошторорға дәрт иттек. Әлбиттә, коллективтар араһында бәйге үткәреү мөмкин түгел, сөнки уларҙың һәр береһе үҙенсә ҡыҙыҡлы, шуға ла бер таҡтаға ҡуйып, баһаларға ярамай. Шуға ла сара өсөн фестиваль йүнәлешен һайланыҡ. Уның директоры - Филүс Хәсән улы Ҡаҙаҡбаев, мин проект авторы. Республикала мәҙәниәт өлкәһендә Президент гранты булмаһа, был фестиваль ҡасан тормошҡа ашыр ине, белмәйем. Бейеү сәнғәте шулай уҡ ҙур сығымдар талап итә торған жанр. Әйтәйек, әлеге ваҡытта ун парға костюм тектереү өсөн кәмендә ярты миллион һум аҡса кәрәк. Ошо грант һөҙөмтәһендә ҡайһы бер ансамблдәргә матди ярҙам да күрһәтә алдыҡ.

Фестивалдә Өфө ҡалаһынан "Мираҫ" ансамбле, Учалынан "Уралтау", Нефтекаманан "Түңгәүер", Стәрлетамаҡтан "Бейеү театры", "Сибай" ансамбленән тыш, Ҡаҙағстандан һәм Марий Эл Республикаһынан коллективтар ҡатнашты. Беҙ уларға "Беҙҙенсә бейегеҙ!" тигән талап ҡуймайбыҙ. Бер милләт тә икенсе милләттең халыҡ бейеүен бар нескәлегендә башҡара алмаясаҡ барыбер. Ни өсөн башҡорт коллективтары башҡа халыҡтарҙың бейеүен күпләп башҡара, тигән һорауҙы йыш бирәләр. Сөнки бөгөн базар иҡтисады сәнғәт өлкәһенә лә яҡшы үтеп инде. Тамашасы тарафынан һорау бар икән, бындай бейеүҙәр ҙә буласаҡ. Тик бының менән артыҡ мауығырға ярамай, беҙ урыҫса бейейбеҙ, тип уйлайбыҙ ғына, әммә барыбер ул кимәлдә бейей алмайбыҙ. Шулай ҙа халыҡ ансамблдәре репертуарының төп өләшөн башҡорт бейеүҙәре алып торорға тейеш. Беҙҙә бит бейей белмәгән бер кеше лә юҡ. Ҡан хәтере бар, кемде генә төртөп төшөрмә, бейей ҙә китә. Халыҡ бейеүҙе ныҡ ярата, шуға ла беҙҙең халыҡ өсөн был фестиваль һис артыҡ булманы. Йыл да грант өмөт итеп булмай, шуға ла фестиваль ике йылға бер тапҡыр булһа ла үткәрелһә ине, быны Мәҙәниәт министрлығы үҙ ҡанаты аҫтына алһа ине, тигән уйҙа һәм хыялда йәшәйбеҙ.



*Бәлки, һүҙ менән килештереп әйтә алмаҫмын, ир-егет ғорур, ысын ир булырға, йәғни, халыҡтың, ғаиләнең терәге, яҡшы атай, ул булырға, күҙендә моң һәм мәғәнә булырға тейеш. Күҙҙәрҙә бөтөн нәмә күренә, шуға ла бейеүҙәрҙә күҙ ҡарашына ҙур иғтибар бирәм. Костюмда иһә халыҡтың бөтөн биҙәү-ҡулланма сәнғәте, байлығы сағылыуы шарт. Ҡыҙҙар ҙа ҡыйыу, ғорур минең бейеүҙәремдә. Фәйзи Ғәскәровтың "Ете ҡыҙы"ындағы кеүек баҫалҡы, хисле, йомшаҡ күңелле ҡыҙҙарға ҡарашым икенсерәк. Баҫалҡылыҡ, йыуашлыҡ сәхнәлә генә түгел, донъя көткәндә лә ҡамасау итеүе бар. Сөнки баҫалҡылыҡ - ҡатын-ҡыҙ өсөн бик нәфис сифат та ул, тик бөгөнгө көндә баҫалҡы булһаң, башҡалар һине баҫып китәсәк. Ҡыйыулыҡҡа нығыраҡ баҫым яһайым, башҡорт ҡыҙҙары миндә бөтәһе лә хан ҡыҙҙары, саялар - хореограф булараҡ, эстетик ҡарашым шулай.*

### Рухты көй оноттормай

Башҡорт бейеү сәнғәтендә яңы бейеүҙәр юҡ, тигәнде йыш ишетергә тура килә. Беренсе фестивалдә милли бейеү сәнғәтен үҫтереүгә үҙ өлөшөн индергән һәр балетмейстерҙы күрһәтәйек, тип, программа төҙөй башлағас, бының бөтөнләй хата фекер булыуы асыҡланды. Шуға ла ҡайһы бер бейеүҙәр гала-концертҡа эләгә лә алманы, сөнки ваҡыт яғынан быны эшләүе мөмкин түгел ине. Киләһе фестивалдәрҙә уларҙың хеҙмәттәрен күрһәтә алырбыҙ, тип ышанам. Яңы бейеүҙәр барлыҡҡа килеүендә, һис шикһеҙ, "Байыҡ" телевизион бәйгеһенең дә өләшө бар. Уны башлап үткәреүгә ярҙам итеп йөрөүселәрҙең береһе булараҡ, был бәйгенең мөһимлеген дә беләм. Үҙешмәкәр сәнғәткә төбәлгән был сараның халыҡ араһында рейтингы ла юғары. Киләсәктә "Башҡорт йөрәге" фестивале менән улар бер-береһен тулыландырып торор, тип ышанам.

Ғөмүмән, башҡорт бейеүенә булған иғтибарҙы иҫәпкә алһаң, ул бер кемде лә битараф ҡалдырмай икәненә төшенәһең. Дәғүә белдереүселәр, хәрәкәттәр дөрөҫ түгел, тегеһе, быныһы етешмәй, тиеүселәр ҙә бар. Ағып ятҡан һыуҙы болғандырып ебәрһәң, ул, бара биргәс, үҙенән-үҙе таҙарынған кеүек, ваҡыт үтеү менән ниндәйҙер хаҡлы булмаған фекерҙәрҙән башҡорт бейеүе ҡотола бара. Бейеүҙәрҙән халыҡсанлыҡ юғала, тиеү менән дә килешмәҫ инем. Әйе, заман башҡа - заң башҡа, бөгөн күп милли коллективтар үҙ асылыбыҙҙан тайпылмаҫбыҙмы, тигән борсолоу кисерә. Заман менән бергә тамашасы ла үҙгәрә, ул сит илдәргә сығып, ундағы сәнғәт өлгөләрен, бөтөн донъя ҡаҙаныштарын күрә йә уларҙы интернет селтәрҙәре аша ҡарай. Башҡорт бейеүе уларҙың кимәленән түбән була алмай. Әммә милли ерлек, халыҡсанлыҡ юғалыр, тип ҡурҡырға кәрәкмәй. Бейеүҙә мөһим урынды музыка алып тора, ул милли рух, милли колорит бирә. Шуға ла мин, мәҫәлән, бейеүҙәремдә тик башҡорт халыҡ көйҙәренә һалам. Халыҡ көйҙәре ситкә тайпылып китергә юл ҡуймай. Уйланғаныбыҙ юҡмы: халыҡ, моғайын, киләсәк быуындар рухты, миллилекте һаҡлаһын өсөн көй ижад иткәндәр ул. Был көйҙәрҙә беҙҙең булмышыбыҙ программалаштырылған. Әйе, беҙҙең иң яҡшы композиторыбыҙ - халыҡ. Заман композиторҙары "Урал", "Буранбай" кеүек мәшһүр көйҙәр ижад итә алмай әле, ти торғайны Заһир ағай Исмәғилев. Шулай уҡ башҡорт халыҡ көйҙәренең потенциалын тулыһынса аса алған бейеүҙәр ҙә юҡ әлегә.

Бейеүгә ниндәйҙер яңы хәрәкәт килеп инеүҙе лә насар тимәҫ инем. "Еҙ үксә"лә 12 төрлө дроб ҡулландым, әммә уларҙың барыһының да нигеҙендә башҡорт тыпырлауы ята. Башҡорт - тәбиғәт балаһы, йөрәгенә ҡош тауышын да, япраҡтар ҡыштырлауын да, ҡылғандар сайҡалыуын да һеңдергән, тик сәнғәтебеҙ халыҡтың көнкүреше менән дә тығыҙ бәйле, бейеүҙәрҙә ат сабышы ла ишетелеп ҡала. Был турала ғалимә, тарихсы-этнограф Лидия Нагаева ла үҙенең китабында яҙа. Халыҡ ижады тигәс тә, ул бит музей экспонаты түгел, ә тере организм, ул үҫергә, хәрәкәт итергә, халыҡ менән бергә үҙгәрергә лә тейеш.

### Ҡыҙҙар сая булһын

Мин ир-егеттәр өсөн бейеү ҡуйыусы балетмейстер булып танылғанмын. Халҡымдың тарихын, фольклорын, легендаларын, әкиәттәрен беләм, хореограф булараҡ, улар аша күңелемдә бейеүҙәге ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ образының өлгөһө мотлаҡ бар. Уларҙа бөтөн йыйылма геройҙарҙың иң яҡшы һыҙаттарын сәхнәләштерәһең, сөнки был бейеүҙәрҙе башҡорттар ғына ҡарамай. Ситтәр һоҡланып, башҡорттар үҙ милләте өсөн ғорурланып ҡарарлыҡ образ булырға тейеш. Әгәр ҙә сәнғәтте тәрбиәләүсе сара итеп ҡарайбыҙ икән, төрлө яҡҡа һибелеп йәшәгән башҡорттар, концерттан һуң килеп, күкрәктәрем киңәйеп китте, тип әйтә икән, был образдар башҡорттоң асылына тап килә, тимәк.

Бәлки, һүҙ менән килештереп әйтә алмаҫмын, ир-егет ғорур, ысын ир булырға, йәғни, халыҡтың, ғаиләнең терәге, яҡшы атай, ул булырға, күҙендә моң һәм мәғәнә булырға тейеш. Күҙҙәрҙә бөтөн нәмә күренә, шуға ла бейеүҙәрҙә күҙ ҡарашына ҙур иғтибар бирәм. Костюмда иһә халыҡтың бөтөн биҙәү-ҡулланма сәнғәте, байлығы сағылыуы шарт. Ҡыҙҙар ҙа ҡыйыу, ғорур минең бейеүҙәремдә. Фәйзи Ғәскәровтың "Ете ҡыҙы"ындағы кеүек баҫалҡы, хисле, йомшаҡ күңелле ҡыҙҙарға ҡарашым икенсерәк. Баҫалҡылыҡ, йыуашлыҡ сәхнәлә генә түгел, донъя көткәндә лә ҡамасау итеүе бар. Сөнки баҫалҡылыҡ - ҡатын-ҡыҙ өсөн бик нәфис сифат та ул, тик бөгөнгө көндә баҫалҡы булһаң, башҡалар һине баҫып китәсәк. Ҡыйыулыҡҡа нығараҡ баҫым яһайым, башҡорт ҡыҙҙары миндә бөтәһе лә хан

*✓ Күрһәткән батырлығы, дәүләт эшендәге уңыштары өсөн бирелгән уларға был дәрәжә. Бейеүҙә ошо батырлыҡты, лидерлыҡты күҙ алдына килтерергә хәрәкәттәр ярҙам итә. Үҙ дәрәжәһен белеп, һалмаҡ ҡына бейей улар сәхнәлә.*



ҡыҙҙары, саялар - хореограф булараҡ, эстетик ҡарашым шулай.

Ир-ат бейеүе тәьҫирлерәк, быныһы ир-егеттең тәбиғәте менән бәйле. Ул таяныс, һаҡсы, яугир, шуға образдары ла сағыуыраҡ. Ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге роле бәләкәй түгел, тап улар геройҙарҙы, яугирҙарҙы тәрбиәләй, әммә күҙгә күренеп бармайҙар. Был күренеш бөтөн милләт бейеүҙәрендә лә шулай. Чечендарҙы ғына алып ҡарайыҡ, сәхнәлә уларҙың егеттәре ут сәсеп тора, ҡатын-ҡыҙҙары, баштарын текә тотоп, һалмаҡ ҡына йөрөй. Айсбергтың һыу аҫтындағы өлөшө ул ҡатын-ҡыҙ, ул ир-егетте күтәреп тора, әммә үҙе быны күрһәтергә маташып, артыҡ сәбәләнмәй. Унан һуң, сәхнәлә лә, тормошта ла ҡатын-ҡыҙға киҫкен хәрәкәттәр килешмәй, физик яҡтан Хоҙай уны шулай яралтҡан.

Ир-егеттәр бейеүенә килгәндә, мине ҡулдарҙы артыҡ өҫкә күтәреүҙә, был хәрәкәттең башҡортса булмауында ла ғәйепләгәндәре булды. Бейеүҙәрҙә ҡулдарҙы күтәрәм икән, мин быны менән халҡымдың рухын күтәргем килә. Ысынлап та, аҫҡа һәленеп төшкән ҡул менән халҡыңды күтәреп буламы икән? Ана, кавказдар, бер ҙә өҫкә күтәрелгән ҡулдарын линейка менән сантиметрлап үлсәп тормай. Уларҙың халыҡтары элек бер ҡасан да аяҡ бармағы осонда бейемәгән. Был хәрәкәт халыҡ араһында осраған ул, матур булғаны өсөн балетмейстерҙар уны киң ҡулланылышҡа индереп ебәргән. Хәҙер, әрмәндәрҙән тыш, бөтөн Кавказ халыҡтары ҡуллана был алымды. Бөгөн чечендар менән грузиндар был алымдың авторлығы мәсьәләһендә бәхәс алып бара. Тау халыҡтарында элек ҡулды күтәреп бейеү ҙә булмаған. Был алым халыҡтың рухын күтәреү ихтыяжынан килеп сыҡҡан. Ҡулды күтәрәм, тимәк, өҫкәрәк, юғарыраҡ ынтылам, ҡул артынан күкрәк, бөтөн кәүҙә күтәрелә.

## Хореограф тарихсы түгел

Совет осоронда өлкән ағайыбыҙ - урыҫ халҡынан өҫтөн була алмай инек, шуға ла тарихыбыҙҙың күп биттәре баҫылыбыраҡ ятты. Хәҙерге көндә милли билдәләнеш буйынса тарихсылар ҙа, археологтар ҙа ҡыйыу фекерҙәр әйтә. Уларҙың ҡайһы берҙәре хатта ысынбарлыҡта булмаған хәлдә лә, хореографтар өсөн ем була ала, ҡыҙыҡлы шәхесме, ваҡиғамы, беҙ уны сәхнәгә сығара алабыҙ. Бейеү - ул сәнғәт, ул тарихты һүҙмә-һүҙ ҡабатламаһа ла була. Мәҫәлән, халҡыбыҙҙың бүреләрҙән килеп сығыуы тураһында боронғо бер легенда бар. Бүре менән өсөн халҡымдың боронғолоғона ишара итеп тороусы мифологик йәнлек. Шуға ла бейеүҙә уны ҡулланыу бик уңышлы тип уйлайым. Унан һуң, бөтөн тамашасы ла тарих, фольклор менән таныш булмауы ихтимал, бейеүҙәр аша ул да үҙенә ниндәйҙер кимәлдә мәғлүмәт ала. Йәки Йәүҙәт Бикбирҙиндың "Генерал Игзаков" бейеүен алығыҙ. Тарихсылар ысынбарлыҡта уның генерал түгел, ә кантон башлығы булыуын дәлилләй. Әммә был хореографҡа бейеү ҡуйыуға ҡамасауламаған. Бынамын тигән бейеү килеп сыҡҡан, уны бөгөн күп бейеүселәр ҙә, балалар ҙа яратып бейей.

## "Тархандар"

Ҡулыма Әнүәр Әсфәндийәровтың "Башҡорт тархандары" тигән китабы килеп эләккәс, улар тураһында ныҡлап эҙләнә башланым. Милләтебеҙҙә бөтөн ҡатламдар ҙа булған, әммә профессиональ бейеү формалашҡан мәлдә эшсе-хеҙмәтсән халыҡ ҡатламына дан йырлау өҫтөн ҡуйылған, ябай халыҡты күтәреү өсөн геройҙар ҙа улар араһынан булырға тейеш булған. Бөтәһе лә йә һунарсы, йә көтөүсе булмаған бит. Араларында йөҙ, йәки мең кешегә бер лидер ҙа осраған. Бәләкәй генә берләшмәлә лә, ауылда ла башҡаларҙы үҙенең артынан эйәртеүсе берәү була. Музейҙарҙа ла ябай халыҡтың кейемдәре һаҡланған, ә бейҙәрҙең, тархандарҙың кейемдәре юҡ, сөнки улар ысынлап та күп булмаған. Музейҙа бер кантон башлығының ғына кейеме осрағаны булды, уны бейеүҙәрҙә ҡулланғайным да. Ел, ғәҙәттә, ағас башынан йөрөүсән, берәй яу, башҡа бәлә килгәндә иң тәүҙә улар ҡырылған. Шулай итеп, был ҡатлам хәтерҙәрҙән юйылған. Ошо китапты уҡығас, Алдар батыр Исҡәевты иҫкә төшөргәс, уларҙың йәмғиәттәге урынын белгәнгә күрә, тархандар тураһында бейеү ҡуйыу тураһында уйлана башланым.

Был бейеүҙе Ф. Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт академик ансамбле башҡара. Тамашасыларға ул бик оҡшаған, рух күтәренкелеге, халҡыбыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғолары кисерҙек, тип әйтеүселәр күп булды. Тархандар - улар төрки телле халыҡтарҙа йәмғиәттең иң юғары ҡатламы. Күрһәткән батырлығы, дәүләт эшендәге уңыштары өсөн бирелгән уларға был дәрәжә. Бейеүҙә ошо батырлыҡты, лидерлыҡты күҙ алдына килтерергә хәрәкәттәр ярҙам итә. Үҙ дәрәжәһен белеп, һалмаҡ ҡына бейей улар сәхнәлә. Музыка ла бейеүҙе тулыландырырға ярҙам итә. Халҡыбыҙҙың һәр ырыуының үҙенең дәүләтселек элементтары - тамғаһы, ҡошо, ағасы, ораны булған. Мин башта ошо элементтарҙы ҡулланып, герб эшләргә уйлағайным. Әммә рәссам, башҡорт тарихы, символикаһы менән ҡыҙыҡһыныусы Илдар Шәйәхмәтовҡа мөрәжәғәт иткәс, ул быға ҡаршы булды һәм тамғаларҙы ғына алырға кәңәш итте. Тамғалар - шулай уҡ боронғолоҡ күренеше. Башҡорт тамғалары ябайыраҡ күренһә лә, улар руник яҙмаларға барып тоташа. Ошо ябайлыҡ халҡыбыҙҙың холҡонда әле лә һаҡланып ҡалған бит.

Костюмдар өҫтөндә лә ентекле эшләргә тура килде. Костюмдар традицион булһа ла, затлы заттан булыуын күрһәтеп тора. Тархандың эргәһендә уның аңына, зиһененә торошло ҡатын-ҡыҙ булырға тейеш. Санкт-Петербургтың этнографик музейында кәләпүш тигән баш кейеме һаҡлана, ул бейек итеп тегелә, тотош тәңкә менән биҙәлгән. Руденко уны хеҙмәттәрендә бик яҡшы итеп тасуирлай. Бына ошо кәләпүште ҡулландыҡ, был да үҙенә күрә бик уникаль күренеш булды. Ул Ф. Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре ансамблендә генә ҡалмаҫ, яңы бейеүҙәрҙә ҡулланылыр, тип уйлайым.

Санкт-Петербург этнографик музейында һаҡланған кәләпүштең ауырлығы - 16 килограмм. Ҡатын-ҡыҙ матур булыу өсөн әллә ниндәй ауырлыҡтарға ла әҙер, быныһына шик юҡ. Әммә был биҙәнеү әйберҙәренең башҡа маҡсаты ла булған. Иң тәүҙә, тәңкәләр яуыз көстәрҙән, яман күҙҙәрҙән һаҡлап торорға тейеш булған, күрәһең. Наталья Степанова тигән рәссам фекеренсә, көмөш тәңкәне тишһәң, аҡса берәмеге булараҡ, уның ҡиммәте юғала. Бының менән башҡорт ҡатын-ҡыҙы, ҡарағыҙ, бына мин күпме байлыҡты биҙәнеү әйберенә әүерелдерә алған хәлле заттанмын, тип әйткән кеүек. Йәғни, биҙәнеү әйберенең байлығына ҡарап, ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге дәрәжәһен, затын да белергә була. Рәссамдың тағы бер версияһы буйынса, бына был кәләпүш - яугирҙарҙың шлемына оҡшаған. Алыҫтан ҡарағанда, ул шлем булып күренә. Борон ирҙәре менән бергә ҡатындар ҙа яуға йөрөгән, шул саҡта кәләпүштәр ялтырап күренеп, яугирҙар һаны икеләтә артыҡ күренгән. Был версияларҙың барыһы ла йәшәргә хаҡлы, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ бейеүе - ул, ысынлап та, халыҡтың күңеле. Быуаттар төпкөлөндә, милләттең үҙе менән бергә барлыҡҡа килгән бейеүҙең бөгөн дә ихласлығы менән тамашасыларҙа һоҡланыу тойғоһо уята алыуы башҡорт халҡының күңелен саф итеп һаҡлап ҡала алыуының да күрһәткеселер ул. Бесәнсеме, һауынсымы, һунарсымы, генералмы, тарханмы, быныһынан бигерәк, бейеүҙәрҙә ихласлыҡ һәм ябайлыҡ мөһимерәк, тигән фекергә килдек геройыбыҙ менән дә. Ә бейеү өлкәһендә бер көнгә лә туҡтамаған бәхәстәргә килгәндә иһә, республикала әлеге көндә бер түгел, профессиональ ансамблдәр араһында - ике, өлкәндәр һәм балалар араһында "Байыҡ" бәйгеһе үтә, Мәҙәниәт йылында бейеүгә генә арналған әллә күпме саралар ойошторола. Риф Ғәбитовтың фекерҙәре лә күп һорауҙарығыҙға яуап биргәндер, тип ышанабыҙ. Эшең менән халҡыңа зыян килтермәһәң, уның булмышынан ситләшмәһәң, милләт вәкиле булараҡ, үҙ-үҙеңә тоғро ҡала белһәң, халҡыңа ошонан да ҙурыраҡ файҙа килтерә алмайһыңдыр, моғайын.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

ТОРМОШ БЫЛ!

# ЙЫЛ ДА ҠАБАТЛАНЫП ТОРҒАН ХӘЛДӘР

## Йыйындан һуң



Ауыл халҡының дөйөм йыйылышы бара. Беҙҙә уны, сход, тиҙәр. Барыһы ла ҡыҙып-ҡыҙып тәртипһеҙлектәр, етешһеҙлектәр тураһында һөйләй. Бер-берәһенең тетмәләрен тетәләр генә. Сүп-сарҙы ярамаған урында түгеүселәр, малдарын көтөүгә йөрөтмәүселәр, йәиһә, һуң ҡыуыусылар, ауыл тирәһен ағас-таш менән тултырып ҡыйлаусылар, урамды иҙгесләп үтеүсе тракторсылар, шоферҙар, йоҡосо көтөүсе, ялҡау һәм шамтыр һатыусы, әхлаҡһыҙ уҡытыусы, намыҫһыҙ етәксе, һәләтһеҙ мәҙәниәт эшмәкәре - барыһы-барыһы ла "кәрәгенә" ала бында. Хатта үгеҙ булмағанлыҡтан ҡыҫыр ҡалған һыйырҙар ҙа, йылдың-йылы ярын ашап, ауылға яҡынлашҡан йылға ла онотолмай. Бөтәһе лә хаҡ һөйләй, бер-берәһенең күҙенә бәреп дөрөҫлөктө әйтә.

Йыйын тамам. Ярһыған ағай-эне һаман тыныслана алмай. Таралышҡан мәлдә лә бәхәсләшеп, һүҙ көрәштереп мәж киләләр.

Ошонан һуң байтаҡ ваҡыт үтә. Ярамаған урындарҙа, унда ла, бында ла сүп өйөмдәре хасил була, аты ла, һыйыры ла, кәзә-һарығы ла урам тулып, баҫыу тапап, көтөү-көтөү булып ҡарауһыҙ йөрөй, сабынлыҡтарҙы, сәсеүлектәрҙе тәләфләй. Шәхси йорт тирәләре, кәртә арттары ағас-таш менән тула, урамды иҙгесләп, әле был яҡҡа, әле икенсе яҡҡа күп тонналы тракторы ла, елле генә машинаһы ла үтеп китә. Ҡоро көндәрҙә саң-туҙандан күҙҙе асырмын, тимә. Көтөүсе эҫе төшкәнсе йоҡлап ята, һатыусы төш етеп килгәндә генә кибетен аса, мәҙәниәт үҙәге һаман, киләһе йыйынға тиклем, бикле тора, әхлаҡһыҙ мөғәллим һуҡмыш йөрөй, намыҫһыҙ етәксе һаман йәмәғәт малына ҡул һуҙа, һыйырҙар ҡыҫыр ҡала, ныҡыш йылға йомшаҡ ярын өңөп ашауын дауам итә. Иң ҡыҙығы шунда: теге йыйында барыһынан да күберәк һөйләгәндәр барыһынан да күберәк тәртип боҙа... Ошолай йыл да ҡабатланып тора.

## Тәүбә

Ауырлыҡ, ыҙалыҡ менән ҡыш сыға ҡорҙашым. Яңы йыл етеретмәҫтән утыны бөтә, март баштарына бесәне наҡыҫлана. Ат бауырына еткән тәрән көрттә бата-сума сей утын, ярым серек һалам ташый, ҡәһәтләнеп әйтеү әйтә:

- Быйыл булһын әле! Ҡар асылыу менән утын хәстәрләй башлайым, үлән өлгөрөү менән иң алдан бесәнгә төшәм, валлаһи!

Йәмле йәй етә, ҡышҡы михнәттәр менән тәүбә лә онотола. Ҡыш уртаһынан ҡорҙашым йәнә сей утын, серек һалам ташырға тотона.

Йыл да шулай ҡабатлана.

## Кемгә ышанырға?

Гүзәл май айы етеүгә, туғай һары сәскә менән ҡапланды. Гүйә, һап-һары диңгеҙ!

- Быйыл һары сәскә күп, уңыш булмаҫ, ахыры, - тип уфтанды бер арҙаҡлы ағай.

Аҙна-ун көн үтеүгә, туғайҙы күгәрсен күҙе баҫып алды. Зәп-зәңгәр диңгеҙгә оҡшап ята ул хәҙер.

- Күк сәскә күп быйыл, иген-бесән емерелеп уңасаҡ, Алла бирһә! -тип ҡыуана икенсе мәртәбәле ағай.

Кемгә ышанырға? Йыл да шулай ҡабатлана...

## Ветерандар теүәлме?

Еңеү көнө яҡынлаша. Райондан шылтыраталар.

- Ветерандар теүәлме икән? Исемлек кәрәк ине...

Үкенескә ҡаршы, теүәл түгел шул! Ҡасан ғына әле уларҙың исемлеге ҡуш табаҡ биткә һыймай ине, ә бөгөн... һыңар ҡулдың бармаҡтары ла етә һанар өсөн.

- Ветерандар теүәлме?

Йөрәк әрнетеп, йыл да ҡабатлана ошо һорау.

## Туҡталмаһын йәшәйеш!

Иртә менән тороп, ишек алдына сыҡтым. Тәбиғәт хозурлығына һоҡланып, йәй матурлығына шаһит булып, илаһи донъя гүзәллегенә хайран ҡалып торам. Донъям теүәл һымаҡ былай. Шулай за ниҙер етешмәгәндәй ихатам эсендә. Сәйер ҙә, шомло ла тынлыҡ хөкөм һөрә. Кинәт кенә аңыма барып етте шунда: таң һарыһынан ҡара кескәсә зыҡ ҡупҡан сыйырсыҡ балалары оя ташлап осоп киткән дәбаһа! Өйөм тирәһе эс бошорғос һил-тынлыҡҡа сумған. Талғын елгә сайҡалып, моңайып торған сыйырсыҡ ояһы бушап, етемһерәп ҡалған. Юҡ та! Яңылышам бит. Ана, сыйырсыҡ урынын турғай биләй һалды. Буш түгел хәҙер оя! Ирәйә биреп, ысын хужа булып, күңелле сырҡылдап ебәрҙе турғай. "Буҙтурғай булһа ла сырҡылдаһын әйҙә!"- тип уйлап, йылмайып ҡуйҙым. Эйе, ихатам йәме булып йәшәһен әйҙә, буш итмәһен ояны.

Йыл да шулай ҡабатланып торһон, тормош дауам итһен, йәшәйешебеҙҙең ҡото китә күрмәһен. Туҡталмаһын ояларыбыҙҙа йәшәйеш!

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Ҡайһы саҡта авторҙарыбыҙ хат аша мәҡәлә ебәргәндә лә, электрон почта аша ниндәйҙер хәбәр еткергәндә лә, үҙ исемен яҙырға онота. Ошо матур ғына яҙмалар ҙа редакция почтаһында ята ла ята. Авторы булмағанға тәҡдим итмәйерәк торғайныҡ. Уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдер үҙенең ошо яҙмаларын танып, беҙгә хәбәр итһә, хатына ҡушып, башҡа яҙмаларын да тәҡдим итһә, бик тә шат булыр инек.**

✓ *"Ярлыҡасы, Раббым, йән алмаҡтан түгел, бисараларҙы йәлләп ҡылған ғәмәлем, - өләсәйемдең ялбарыулы шыбырҙауы, имеш. - Был донъяла тилмертеп йөрөткәнсе, күҙҙәре асылмаҫ элгәре өлгөрәйем, тимен.*





Байгилде МОТАЛЛАП

# ҠАРҒЫШТАН АЛҒЫШ ЯҠШЫ

(Хикәйә)

Иртәнсәк эшкә сыҡҡанда ярым ҡараңғы подъездың ишеге төбөнә ҡуйылған ҡумтала нимәнеңдер сыйнай-сыйнай йыбырлағанын шәйләнем. Эйелә биреп ҡараһам - яңы тыуған дүрт-биш бесәй балаһы. Аңғанса булмай, артымда мыяулаған тауыш ишетелде. Бесәй икән. Әсәләре ҡайҙандыр килеп сыҡты. Бәлки, өҫкө ҡаттарҙа тамаҡ ҡайғыртып йөрөгәндер.

- Ҡылғанһың икән, урамда берәҙәк бесәй аҙ ине. Улар тағы күбәйә икән былай булғас, - тинем үҙенең әсәлек йомошона тотонған бесәйгә.

Ояһына нисек йәтешләп ятырға самалап торған инәһен тойған бесәй балалары уғата йәнләнеп китте. Тыңламаған аяҡтарын ҡыймылдатып, уға яҡыныраҡ шыуырға маташалар, морондары менән еҫ килгән яҡҡа ынтылалар, сабырһыҙланып сыйнайҙар. Бесәй, ятҡан ыңғай, һәр береһен ялап, мин бында, борсолмағыҙ, тигәндәй, иркәле мырылдап алды. Имсәккә етешкәс, балалары ла тынып ҡалды.

Күрәһең, бесәйҙе хайуан йәнле берәйһе подъезға индереп һалған. Мал кеше өсөн муллыҡ сығанағы булһа, эт менән бесәй - уның ярҙамсыһы ғына. Тәүгеһе - һунарҙа, йорт-ҡураны һаҡлауҙа, икенсеһе - сысҡанға ҡаршы көрәштә. Шуға ла урамда берәҙәк мал булмай, ә эт менән бесәй - аҙым һайын. Ярҙамсыға бит кеше һәр саҡ мохтаж түгел. Уларҙың, тамаҡ яуы булып, күбәйеп китеүе лә бер кемгә лә кәрәкмәй.

Өйгә инеп сыҡҡан һайын бер килке баяғы бесәй балаларына ҡарап торам. Уларҙың йәшәргә тырмашып ятыуҙары, инәләренең үҙ үрсемен мөкиббән китеп бағыуын тамаша ҡылам. Хайуандар донъяһына хас ошондай тәбиғи ынтылыш кешеләрҙең бөтәһендә лә булһа ине, тип ҡуям шунан.

...Көндәрҙең береһендә, уйҙарыма сумып урам буйлап китеп барғанда, юлымды тәнтрәкләп саҡ атлаған бесәй балаһы ҡыйҙы. Йәне әллә ҡайһы ерендә саҡ эленеп торған меҫкен аяҡтарын көскә һөйрәй. Йөнө ҡаҡашып, тимгел-тимгел уҡмашып тора. Ишетелер-ишетелмәҫ мыяулай, бер күҙен әллә ҡарға суҡып алған, әллә бәғерһеҙ бала-саға имгәткән - уның урынында яра. Үтә лә имәнес ҡиәфәттә ине бесәй балаһы. Минән килгән тән йылыһынмы, хәрәкәтемдеме, әллә еҫемдеме тойоп, туҡтап ҡалды, башын бороп, ялбарыулы тауыш сығарҙы. Йә, Хоҙай, ниндәй ғазаптар киҫерәлер инде был меҫкен - йөрәк һыҙлап ҡуйҙы. Минең тарафтан өмөт юҡлығын аңлап, буғай, тағы бер-ике аҙым атланы ла, ҡоймаға терәлеп, ергә хәлһеҙ ауҙы. Шул урында уҡ йән бирҙе әллә, башҡа ҡуҙғалманы.

...Подъезда биш бесәй балаһы инә һөтөн һура. Көнләп түгел, сәғәтләп үҫәләр, нығына баралар... Кискеһен эштән ҡайтҡанда бесәй балаларына ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ ҡарап торҙом. Күп тә үтмәҫ, күҙҙәре лә асылыр, йомшаҡ матур йомғаҡ булып, йүгерешеп йөрөрҙәр ошонда. Шунан... Иҙәндә улар ҡалдырған таптар күренә башлар, яман еҫтәре танауҙы ярыр... Әлбиттә, бесәй балаларын урамға ҡыуып сығарасаҡтар. Ә унда... Эттәр, бала-саға, машиналар... Урамда тамаҡ хәстәрләү ҙә үҙҙәренә ҡаласаҡ.

- Эйе, - тинем үҙ алдыма. Сығарған хөкөмөмдө шулай раҫланым була әйттем быны.

Иртән күҙҙәремде асҡанда, таң яңы һарылана башлағайны. Ғәҙәттәгенән бер сәғәткә алдараҡ уяндым. Ҡатынымды борсомаҫҡа тырышып, ипләп кенә торҙом. Икенсе бүлмәгә сығып кейендем. Әйләнгән һайын сәғәткә күҙ ташлайым - бер минутҡа ла һуңларға ярамай.

Подъездағы бесәй, ғәҙәттә, ишек асҡан беренсе кеше артынан үҙ йомошо менән тышҡа сыға. Ошоно иҫәпкә алып ҡорҙом да инде планымды: инәләре сығып киткән арала балаларын урларға булдым.

Ысынлап та, ишекте асҡайным, бесәй тышҡа атлыҡты. Ниәтем изге, тип, үҙемде-үҙем ышандырырға тырышһам да, күңелемдә икеләнеү тойғоһо...

Бала сағымда булған бер хәл иҫемдән сыҡмай.

- Бушанған бит был нәҫтәкәй, - тине өләсәйем, тамаҡ һорап, аяғы тирәһендә уралған бесәйгә ҡарап. - Ҡана, ҡаймаҡ туғып һөт бирәйем меҫкенкәйгә. Һин, улым, ҡараштыр әле, ҡайҙа икән балалаған урыны.

- Таптым, өләс. Бында, урындыҡ аҫтында улар. Бишәү, - бесәй балаларын үҙем күргем килгәнгә, ике әйттереп торманым, барлыҡ мөйөшһәйеште тиҙерәк ҡарап сыҡтым. Бер туҡтауһыҙ хәрәкәттә булған кескәй төйөрсөктәр миңә үтә лә меҫкен күренделәр. Тотоп ҡарағым килһә лә, тейергә ерәндем. Ҙур башлы, йомоҡ күҙле - имәнестәр ине улар.

Кис булды, йоҡларға яттыҡ. Өн менән төш араһында ниндәйҙер тауыш ишетәм: "Ярлыҡасы, Раббым, йән алмаҡтан түгел, бисараларҙы йәлләп ҡылған ғәмәлем, - өләсәйемдең ялбарыулы шыбырҙауы, имеш. - Был донъяла тилмертеп йөрөткәнсе, күҙҙәре асылмаҫ элгәре өлгөрәйем, тимен. Бөтәһен дә аҫырай алмайым, күрше-тирәлә бесәйһеҙ өй юҡ. Ни ҡылмаҡ кәрәк? Сараһыҙҙан гонаһлы булыуым. Кисерә күр, Хоҙайым". Өй эсе ҡараңғы. Шәм яҡтыһында өләсәйемдең йыбырлаған нимәнелер, ике ҡуллап алып, биҙрәләге һыуға төшөргәнен шәйләйем. Был эштең айышына төшөнә алырлыҡ хәлдә түгелмен, зиһенем йоҡонан албыраған.

Иртәнсәк торғас та урындыҡ аҫтына йомолам. Бесәй балаларының хәлен белергә. Һәм шулай уҡ тиҙ килеп сығам.

- Бесәй балаһы берәү генә...- аптыраулы ҡарашымды өләсәйемә төбәйем.

- Керис алып киткәндер, - тип яуапланы ул был һорауҙы көткән кешеләй бер ҙә аптырамай. Үҙе нишләптер минән күҙҙәрен йәшерҙе.

Тупһаға сығып ултырҙым. Ҡояшлы йәйге иртә миңә көндәгесә ирәйеүле тойолманы. Шулай минрәүләнеп ултырғанда, баяғы төшөмдө иҫләнем - әллә бесәй балаларын өләс һыуға батырҙымы? Төш түгел, өн булдымы икән күргәнем? Үҙем дә уйламаҫтан, һикереп торҙом, өй ишегенә уҡталғандай иттем дә, йыуынты һыу түккән урынға - кәртә артына - йүгерҙем. Үле лә, тере лә бесәй балалары күренмәне унда...

Ваҡыт үткәс, ҙурайып, тормоштоң әсе-сөсөһөн татығас ҡына өләсәйемдең бесәй балаларын батырып үлтергәненә шигем ҡалманы. Уны ғәйепләрлек бер генә лә дәлил килтерә алманым. Урамда тәғәм ризыҡҡа тилмереп, ҡыйналыуҙан күҙ-баштары ҡанһырап йөрөгән эт-бесәйҙе күрмәй үтеү ҙурыраҡ гонаһ икәнен беләм хәҙер...

Тәүәккәлләп эйелдем дә, бесәй балалары ятҡан ҡумтаны ҡулыма алдым. Күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәр сығарған көнкүреш ҡалдығын йыйыусы махсус машина килгәнсе ҡумтаны контейнерға сығарып өлгөртөргә кәрәк. Ишекте астым. Икеләнеп, оҙағыраҡ тороп ташлағанмын, күрәһең, йомошон йәһәтләп ослаған бесәй подъезға килеп тә инде. Ҡумта ултырырға тейешле урынға барҙы ла, туҡтап ҡалды. Ояһының урынында булмауына хафаланып, саҡырыулы мыяуланы. Инәһенең тауышын ишеткән балалары кем уҙарҙан сыйнарға керештеләр. Бесәй миңә төбәлде. Ҡарашы: "Был ни эшләүең, кеше? Балаларымды нишләп алдың?" - тигәндәй һораулы һәм аптыраулы ине. Салбарымдың балағына башы менән берҙе генә ышҡынды ла, артҡы аяҡтарына баҫып, ҡумтаға ынтылды, ялбарыулы мыяуланы. Ҡумтаны кире урынына ҡуйыуҙан башҡа сара ҡалманы. Бесәй миңә рәхмәтле ҡарашын ташлап, иркәле мырылдай-мырылдай, балалары янына инеп ятты.

Төшкөлөккә ҡайтыуыма подъезда ҡумта юҡ ине.

- Өй алдын йыйыштырыусыға йөҙ һум биргәйнем, бесәйҙе балалары менән подъездан олаҡтыр, тип. Молодец, әйткәнде эшләгән икән, - беренсе ҡатта йәшәгән күршенең тауышына тертләп киттем. - Урамда йөрөгән этбесәй шул уҡ ҡый бит. Йыйһын, кәрәк ергә урынлаштырһын - уның эше. Өйҙә, вазалағы кәнфит - татлы ризыҡ, ә инде ни рәүешлелер ул ерҙә аунап ятһа - ҡый. Урыны ла, тимәк, ҡыйлыҡта.

- Ҡайҙа ҡуйҙы икән? - һорауым урынһыҙ ине. Проблема хәл ителгән, ә нисек, ни рәүешле - уныһы мөһим түгел дә баһа.

- Бәлки, икенсе подъезға күсереп ултыртҡандыр. Унан да йөҙ һум алһа, эсен тишәмени, ә? - күршем тормошто ҡатмарлаштыра торған кешеләрҙән түгел инде былай.

- Эйе шул, - тигән булдым. Шулай ҙа кире эшкә сыҡҡанда контейнерҙар ҡуйылған урын тирәһен байҡап киттем. Беҙҙең бесәйҙең эҙҙәре күренмәй ине унда.

Бер нисә көн үтте. Бесәй балаларын онота ла башлағайным инде. Саң борҡолдатып асфальт һепереүсе апай менән, ғәҙәттәгесә, һаулыҡ һорашып үтеп киттем дә, туҡтап:

- Беҙҙең подъездағы бесәйҙе ҡайҙа ҡуйҙығыҙ? - тип һораным үҙем дә аңғармаҫтан.

- Бесәйҙе? - Апай ҡайтарып һораны. Күрәһең, көндәлек мәшәҡәттәр теҙмәһендә, ул эпизод хәтеренән юғалып та өлгөргән. - Ә-ә-ә, бесәй балаларынмы? Икенсе подъездан? Мин уларҙы приютҡа тапшырҙым.

- Ниндәй приют тағы? - аптырарға сират миңә етте.

- Һуң, гәзиттә яҙҙылар ҙа баһа, берәҙәк эт менән бесәйҙәр өсөн приют асылды, тип. Һеҙҙең бесәйҙәр унда беренселәрҙән булып урын алды. Хатта аҡса ла түләйҙәр. Бер башҡа - йөҙ һум. Алты йөҙ бирҙеләр миңә, рәхмәт әйттеләр.

- Китсе! - Бесәй балаларының бәхетле яҙмышына ҡыуаныу ҙа, кешеләрҙең дә шул тиклем мәрхәмәтле була алыуҙарына аптырау һәм һоҡланыу ҙа ята ине был ауазымда.

- Ҙур бер эшҡыуар асҡан ти уны. Вис аҡсаһын үҙе түләй, имеш. Ныҡ байҙыр, берәҙәк хайуанҡайҙарҙы аҫрауға алғас, ишшу аҡсаһын да түләгәс. Асарбаҡтар, беҙҙе лә алығыҙ, тип килеп китәләр, ти хатта.

- Быныһын шапырталарҙыр. Кеше көнлө эт менән бесәй түгел бит улар. Эшләргә ҡулдары, әйтергә телдәре бар.

- Эйе, хайуанҡайҙар телһеҙ шул. Уларҙың аһ-зарҙарын кем ишеткән дә, кем белә...

---

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠАЛА УРАМЫНДА КҮРГӘН МӘҘӘК

**Гәзитебеҙҙә "Һеҙҙең ауылда нисектер, бына беҙҙең ауылда..." тигән шаян рубрика бар бит инде. Шуға эйәреп, "Һеҙҙең ҡалала нисектер, бына беҙҙең ҡалала..." - тип, ҡала урамдарынан үткәндә осраған бер мәҙәк хәл тураһында яҙмаҡсы булдым.**

Әлбиттә, ауыл менән ҡаланы сағыштырып булмай. Ҡала хәлдәре сәйерерәк. Тик ул сәйер һәм мәҙәк хәлдәрҙе күрә, тоя белгән кешеләр генә аҙыраҡ. Сөнки ҡала урамдарында, ғәҙәттә, үҙ уйҙары, үҙ эше менән ҡабаланып атлаған, транспортҡа йүгергән кешеләрҙе генә осратырға мөмкин бит. Ә шулай ҙа... Бына яҙғы бер көндә урамдан үтеп барам. Әле япраҡ та ярмаған бер ағас ботағына ҡунып, сыр-сыу килешкән турғайҙарға иғтибар итеп, туҡтап, күҙәтә башланым. Нимә бүлешәләр улар? Үтеп барған бер ҡатын яныма туҡтаны ла: "Наверное, это заседание Госдумы", - тип шаяртты. Көлөштөк. Теге ҡатын: "Похоже, это Верхняя палата", - тип өҫтәне. "Верхняя палата менән Нижняя палаталар барлығын белгәс, моғайын, парламент яңылыҡтары тапшырыуын даими тыңлайҙыр", - тип уйлап алдым. Уға ҡушылып, үҙәк телевидениенан күргәндәрем, шул уҡ Дәүләт Думаһы ултырыштарында ишеткәндәрем тураһында мин дә шаян күҙәтеүҙәрем менән уртаҡлашырға иттем дә, тыйылдым. Йәшерәк саҡта шаян һығымталар яһарға тыйылмай инем, әлбиттә, ләкин хәҙер, етмеш йәште аша атлағас, телемде тыйып, шымып йәшәргә ҡарар иттем. Бына әле лә әңгәмәсем үҙ юлы менән китеп барҙы, мин дә ары атланым һәм баяғы шаяртыуҙы йомшартып: "Был һалҡын ҡышты имен-аман ҡышлаған турғайҙар, шулай йыйылышып, бер-береһен йылы яҙ етеү менән ҡотлағандыр", - тигән һығымта яһаным...

**Айгөл АХУНОВА.**

АФАРИН!

# ЭТНИК КИНО ФЕСТИВАЛЕ...

## көмөш Аҡбуҙатҡа атлана

**Америка актрисаһы Робин Райт әйткәнсә: "Кино уйланыу теләге тыуҙырырға тейеш. Әммә бөгөн күпселек фильмдар һиндә ашау-эсеү теләге уята". Ысынлап та, күңел талаптарына яуап бирерлек, уйға һалырлыҡ, фәһемле һәм шул уҡ ваҡытта телевизор ҡараусыларға ниндәйҙер файҙалы мәғлүмәт еткергән, йөрәккә үтеп инерлек фильмдар һирәк күрһәтелә. Ниндәй илдә төшөрөлгән фильм булһа ла, милли колорит, урындағы гөрөф-ғәҙәт, тормош сағылдырылмай, бөтөн фильмдар бер ҡалыпҡа һалынған. Һуғыш, талаш-тартыш тураһында ҡарап, ялҡып китеүсе тамашасылар өсөн быйыл 27-29 ноябрҙә Өфөлә үтәсәк "Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале бик әһәмиәтле булыр, тип көтөлә.**

"Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале быйыл беренсе тапҡыр үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, конкурсҡа 200-гә яҡын фильм килгән. Киләһе этапҡа шулар араһынан ни бары 33 фильм ғына үткән. Фестивалдең етәксеһе, "Башҡортостан" киностудияһы директоры Азамат Хужахмәтов билдәләүенсә, былдай фестивалдәр кино сәнғәтен үҫтереүсе төп көс, шуның менән бергә милли кинематографты алға этәреп булмай. "Этник кино - ул халыҡтың рухи байлығын, йолаларын, гөрөф-ғәҙәттәрен, көнкүрешен сағылдырыусы фильмдар. Ошо йүнәлештә эшләүсе режиссерҙар хеҙмәт емештәрен йыш ҡына халыҡҡа еткерә алмай, ул фильмдар телевизорҙа, кинотеатрҙа күрһәтелмәй. Милләттең йолалары, рухиәте, көнкүреше, тарихы сағылған был фильмдарға ла иғтибар артыуын теләп, фестивалде башлап торабыҙ", - ти Азамат Шәриф улы.

Конкурсҡа Рәсәйҙең төрлө ҡала һәм өлкәләренән, Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Латвия, Белоруссия, Болгария, Куба, Иран, Ирак, Германия илдәренән килгән эштәр араһынан иң яҡшылары Өфөнөң "Родина" кинотеатрында һәм "Актерҙар йорто"нда бушлай күрһәтеләсәк, уларҙы теләгән һәр кеше инеп ҡарай аласаҡ. Фестивалдең координаторы, кинорежиссер Вилүрә Исәндәүләтова әйтеүенсә, конкурстың тәүге һайлап алыу турынан үтмәгән, ләкин идеяһы, әһәмиәте, эшләнеше яғынан бер ҙә кәм булмаған туғыҙ фильм конкурстан тыш "Актерҙар йорто"нда сәғәт киске алтынан һуң күрһәтеләсәк. "Этник кино бөгөн яйлап ҡына боевик, триллер, ҡот осоргос фильмдарға позицияларын биреп, артта ҡала бара. Үҙәк каналдарҙа берәй ҡасан бүрәттәрҙең, яҡуттарҙың, йә булмаһа осетиндарҙың шәп киноһын күргәнебеҙ бармы? Халыҡтар араһында дуҫлыҡ, бер-береһенең мәҙәниәтенә ҡарата ихтирам, кешене һанлау тигән сифаттар ҙа беҙ төрлө милләттәрҙең тарихын, донъяға ҡарашын, көнкүрешен белмәгән, аңламаған өсөн юғала бара. Этник кино иһә, халыҡтың философияһын, тарихын, бөгөнгөһөн сағылдыра. Башҡорттар тураһында ла бүтән халыҡтарға күрһәтерлек кинолар төшөрөргә мөмкин, йөҙ менән боролорға ғына кәрәк", - тип, фекерҙәре менән уртаҡлашты Вилүрә Әҙеһәм ҡыҙы.

АКБУЗАТ

Международный кинофестиваль национального и этнического кино

Аҡбуҙат
Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале

Akbuzat
International Festival of National and Ethnic Films

Әйткәндәй, фестивалдә "Башҡортостан" киностудияһы төшөргән "Визит" һәм "Мин өйләнәм" ҡыҫҡа метрлы фильмдары, Айнур Аскаровтың "Бал әсеһе", Вилүрә Исәндәүләтованың "Мөрйәнән күтәрелә төтөн, берүк һүрелмәһен" документаль фильмдары күрһәтеләсәк. Әлегә ойоштороусылар "Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале сиктәрендә режиссер, рәссам-ҡуйыусы Шәфҡәт Әбдусәләмов, актриса Ольга Кабо һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы Алексей Булдаков ҡатнашлығында ижади кисә ойоштороу тураһында һөйләшеүҙәр алып бара. Фестивалдә ҡатнашҡан фильмдарҙы Тажик Республикаһы режиссеры Давлат Худоназаров, Ҡырғыҙ Республикаһының халыҡ артисы, режиссер Актан Арым Ҡубат, Үзбәкстандың дәүләт премияһы лауреаты, кинодраматург Одельша Агишев һәм Рәсәй Кинематографтар союзы етәкселәре баһалаясаҡ. Махсус призддарҙан тыш, иң юғары баһаға лайыҡ тип табылған фильм авторына "Көмөш Аҡбуҙат" тапшырыласаҡ.

"Әгәр йыл аҙағында мин ун шәп фильм күрҙем тип әйтә алам икән, тимәк, йыл яҡшы үткән", - тигән америка кинорежиссеры Квентин Тарантино. "Аҡбуҙат" халыҡ-ара этник кино фестивалендә күрһәтелгән фильмдарҙы ҡараған һәр кем өсөн йыл уңышлы һаналасаҡ, тип ышаныс менән әйтергә була. Башҡортостан Республикаһы Президенты Гранты аҡсаһына "Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивален ойоштороуҙан тыш, "Башҡортостан" киностудияһына кино төшөрөү өсөн павильон төҙөләүен иҫәпкә алғанда, киләсәктә башҡорт фильмдарының һаны бермә-бер артыр, йылдар яҡшы үтер, тигән өмөт тә бар.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# НӘСҮР ЙӨРӨШБАЕВ: "ФЕСТИВАЛГӘ ЫШАНЫСЫМ ҘУР"

**"Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кинофестивалдә ҡатнашыусылар араһында "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына күптән таныш булған, Германияла йәшәгән яҡташыбыҙ Нәсүр Йөрөшбаевтың да исеме бар. Уның яңы ижад емеше - "Атайымдың тауышы" исемле документаль фильм - Ҡаҙанда үткән X Халыҡ-ара Мосолман кинофестивалендә һәм Севастополь ҡалаһында үткән Ю. Озеров исемендәге XII хәрби кино фестивалендә ҡатнашып та өлгөрҙө. Бына хәҙер был фильм беҙҙең тамашасы хөкөмөнә лә сығарыла. Кинофестиваль алдынан режиссер менән интернет аша әңгәмә ҡорҙоҡ.**



**▸ Нәсүр, һинең үҙең гәйнә башҡортоһоң. Сығышың - Пермь өлкәһенең Барҙа районы. Ҡазанда уҡыныңыҙ, был ҡала менән һеҙҙе күп нәмә бәйләй. Әммә Башҡортостан менән дә ныҡлы бәйләнештәһегеҙ...**

- Һаумыһығыҙ, яҡташтарым! Эйе, мин гәйнә башҡорттары яғынан, беҙҙең яҡтарҙа иң ҙур һаналған Тол йылғаһы буйында урынлашҡан Баҡса-Ауыл тип аталған ауылданмын. Йылға аша Урал тауҙары йәйрәп ята. Ауыл ҡаршыһындағы иң бейек тау Мөкит-Тау тип атала. Кескәй саҡта ул миңә шул тиклем ҙур күренә торғайны, хәҙер инде ул сүккән кеүек... Әллә үҙ ауырлығы баҫты уны, әллә йылға яры күтәрелде. Тик ул гел күркәм, һәм мин беләм - ул мине күрә, мине тоя... Миңә, улылай күреп, өндәшкеһе, иркәләгеһе, аҡыл өйрәткеһе килгән кеүек... Мин ҡайтҡан һайын тау буйына сығып ултырам, күңелем менән уға өндәшеп, аралашам, ул барыһын да аңлай кеүек. Ә инде Башҡортостан иле тураһында мин кескәй саҡтан ишетеп үҫтем. Уның хаҡында миңә олатайым, өләсәйем, атай-әсәйем әкиәт кеүек һөйләй торғайны. Атайым гүмере буйы ат тотто. Колхоз заманында ат тоторға ярамай ине, әммә атайым колхоз атын үҙендә аҫыраны. Колхоз рәйесе уға рөхсәт итте - ни тиһәң дә, ғаиләлә һигеҙ бала үҫтек. Оло ағайҙарым - Зәрифйән менән Әнүәр - был донъянан иртә китте. Алты бала ҡалдыҡ. Йортобоҙ гөүләп торҙо. Атайым шул атына атлана ла, Өфөгә тауар алырға сығып китә ине. Улар бер каруан булып, урман аша сығып китер ине. Ҡайта ла, миңә Башҡортостан тураһында һөйләй... Халҡы шундай матур, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙары... Ҡымыҙ эсәләр, ҡурай уйнайҙар, икһеҙ-сикһеҙ дала йәйрәп ята... Атайымдың һөйләүенән генә ҡурай моңона ғашиҡ булдым. Ә сикһеҙ даланы бер нисек тә күҙ алдына килтерә алмайым...

Пермь яҡтарында йәшәүселәр, ғәҙәттә, Ҡазанға уҡырға китәләр ине. Мин дә шунда юлландым, тик университет тамамлау менән Башҡортостанға аспирантураға барам, тигән ниәтем бар ине. Хатта беҙҙең декандар алдан һөйләшеп тә ҡуйғайны. Әммә яҙмыш еләдәре, йәшлек һәм мөхәббәт елдәре мине Германия яғына алып китте... Бына инде 26 йыл Германияла йәшәйем. Демократик көнсығыш Германияның капиталистик Германияға әйләнгән осорон үҙ йөрәгем аша үткәрҙем. Хәҙер инде документаль фильмдар төшөрәм, проза һәм йырҙар яҙам...

"Атайым тауышы" фильмы Беренсе донъя һуғышы хаҡында. Йөҙ йыл элек Германияла тотҡонда булған татар менән башҡорттарҙың тауыштарын - һөйләштәрен, йырҙарын яҙып алыр булғандар. Был уникаль яҙмаларҙы мин Лейпциг һәм Берлин архивтарында күптән тапҡайным. Иң тәүге фильмды Башҡортостанда эшләргә уйлағайным, тик килеп сыҡманы...

**▸ Нәсүр, минең был тарихҡа тура ҡағылышым бар. Һөйләп китәйем. Был сенсация хаҡында беренсе булып "Киске Өфө" гәзите биттәрендә һөйләгәйнек, хәтерендәләр? Киностудия, аҡса юҡ, тип баш тартҡас, милләтебеҙҙең күренекле шәхестәре - Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр, Әнүәр Әсфәндийәров, Марат Ҡолшәрипов һәм башҡалар хөкүмәткә яҙған хатыбыҙға ҡултамға ҡуйҙы. Бына шул саҡта беҙҙең сенсацион фильм эшләргә мөмкинлек бар ине лә бит... Әммә беҙгә ярҙам ҡулы һуҙыусы булманы...**

- Эйе, хәҙер инде был сенсация түгел... Мин тәүҙә китапханала Готхольдь Вайлдең "Татар текстары" тип исемләнгән китабын таптым. Ул саҡта бит татарҙы ла, башҡортто ла, башҡа милләт кешеләрен дә дөйөмләштереп "татар" тип атағандар. Мин шундуҡ ул китапты руссаға тәржемә итергә тотондом. Тотҡонда башҡорт кешеләренең күплеге асыҡланды. 120 000 татар һәм башҡорт тотҡондары араһында, 12 000 тотҡондо Берлин янындағы "Йөҙәм тауы" тип аталған лагерҙа урынлаштырғандар. Шунан ошо китап эҙҙәре буйлап мин йырҙарҙың тауыш яҙмаларын да таптым. Был тауыштарҙы ул замандың яңы технологиялары буйынса тәүҙә балауыҙға яҙҙырғандар, шунан еҙ пластинкаларға баҫҡандар.

Башҡортостанда был турала кино төшөрөү мөмкинлеге булмағас, мин Татарстанда бер тотҡондоң ҡыҙын табып, шул инәйгә атаһының тауышын тыңлаттым.

**▸ Быйыл Беренсе донъя һуғышына - йөҙ йыл. Уны беҙҙең илдә "билдәһеҙ һуғыш" тип йөрөттөләр, һәм ул саҡтағы ваҡиғаларҙы асып биреү өсөн бик күп саралар үткәрелде...**

-Шулай ҙа әлегә мәғлүмәтҡә ҡарағанда һораүҙар күберәк. Йәштәр был һуғыш хаҡында бик аҙ белә. Ә бит үҙ илен, Рәсәйен һаҡларға тип киткән меңәрләгән кеше һуғыш яланында ятып ҡалған. Араларында яҡташтарыбыҙ ҙа байтаҡ. Был йәһәттән мин журналист булараҡ та, кинодокументалист булараҡ та һөйләйем. Башҡортостанда ла был темаға кино төшөрөрмөн, тигән ниәтем һүрелмәне. "Башҡортостан" киностудияны ярҙамында "Ағалы-энеле икәү" тигән фильм проектын икенсе йылға тормошҡа атҡарырбыҙ, тип уйлайым.

(Дауамы 16-сы биттә).

ИНТЕРНЕТТАН



# АШАРҒА ЯРАҠЛЫ...
## батарея

■ Балаларҙы хәүеф тәрлә ерҙә һағалап ҡына тора. Иң ауыры, улар үҙҙәре уларға тартыла - магнит шарҙарҙы йоталар, сымдарҙы сәйнәйҙәр. Теоретик яҡтан, бәхетһеҙ осраҡтарға килтергән предметтар менән ҡулланыуҙы тыйыуға ла була, әммә бынан да яҡшыраҡ ысул бар, ти ғалимдар. Гарвард медицина мәктәбе менән Массачусетс технология институты белгестәре сәғәт һәм уйынсыҡтарҙа йыш ҡулланылған төймә кеүек бәләкәй батареялар өсөн махсус ҡатлам ҡулланған. Бала ябай батареяны йотҡан саҡта батареянан бүленеп сыҡҡан матдәләр ашҡаҙан стеналарындағы лайлаға тәьҫир итә. Һөҙөмтәлә, ашҡаҙандың стенаһын тарҡатыусы һелтеле гидроксид ионы барлыҡҡа килә. АҠШта ғына йылына 3 меңдән ашыу ошондай осраҡ теркәлә. Ғалимдар уйлап тапҡан яңы ысул буйынса яһалған батарея уҙ урынына ҡуйылмаһа, бөтөнләй эшләмәй. Сөнки ул металл атомдарынан торған силикон нигеҙендәге йоҡа ғына ҡатлам менән ҡапланған. Батарея эшләһен өсөн уға баҫым талап ителә, металл атомдары бер-берейенә яҡын урынлашһа, квант физикаһы күренеше - туннель эффекты хәрәкәткә килә.

■ Рәсәй ғалимдары билдәләүенсә, быға тиклем әүҙемлек режимы буйынса кешеләрҙе "өкө"гә һәм "һабан турғайы"на бүлеп йөрөтһәләр, хәҙер "күгәрсен" тибын уйлап тапҡандар. Әгәр ҙә өкөләр кеүек иртән йоҡоғоҙ килә, ә кисен һабан турғайына оҡшап, ныҡ арыйһығыҙ икән, тимәк, һеҙ - күгәрсен, ти улар. Тикшеренеүҙәрҙә 130 кеше - 76 ҡатын-ҡыҙ менән 54 ир-егет ҡатнашҡан. Улар бер тәүлек буйына йоҡламаҫҡа тейеш булған. Ҡәһүә, энергетик йәки алкоголле эсемлектәр тыйылған, улар бер нисә сәғәт һайын үҙенең хәленең торошо тураһындағы һорауҙарға яуап биргән. Һөҙөмтәләр буйынса, 29 кеше - "һабан турғайы" тибына ҡараусы билдәле булған, улар иртәнге 9-ҙа үҙҙәрен яҡшы тойһа ла, киске 9-ҙан һуң арыуҙарын йәшерә алмай башлаған. 44 кеше үҙен "өкө" итеп күрһәткән: улар кисен ныҡ әүҙем, әммә иртән бер нәмә лә эшләй алмаған. 25 ҡатнашыусы тәүлектең бөтөн мәлендә лә әүҙем булған, ҡайһы берҙәренең иртәле-кисле йоҡоһо килеүе күҙәтелгән.

■ Хроник арыу синдромы - шаярыу түгел, ә рәсми танылған ауырыу. Америкала уның менән миллиондан ашыу кеше ауырый. Рәсәй буйынса әлегә мәғлүмәттәр юҡ, сөнки был сирҙе депрессия, ипохондрия һәм башҡа ауырыуҙар менән бутарға мөмкин. Хроник арыуҙы белеүе ҡыйын түгел: МРТ үткән саҡта бындай кешенең баш мейеһенең аҡ матдәһе тейешле кимәлдә булмай. Стэнфорд университеты ғалимдары был сир менән ауырыусыларҙың баш мейеһе сәләмәт кешеләрҙең мейеһенән нимәһе менән айырылыуын тикшереп ҡараған. Хроник арыу синдромы менән ауырыусыларҙың мейенең айырым өлөштәрен тоташтырып тороусы аҡ матдәһе ғәҙәттәгенән түбәнерәк булып сыға.

■ АҠШ ғалимдары раҫлауынса, беҙ дуҫтарҙы тауышына ҡарап һайлайбыҙ. Ғәҙәттә, уларҙың тауышы беҙҙекенә оҡшаған була. Белгестәр әйтеүенсә, тегеге йәки был кешенең тауышына хас акустик эффекттар танышҡан саҡта үҙенсәлекле сигнал булып тора. Һәр кешенең тауышына билдәле бер ноталар күҙәтелә. Әгәр ҙә ошондай уҡ ноталар башҡа кешенең тауышында яңғырап китә икән, ул шунда уҡ дуҫ кеүек ҡабул ителә.

ТӘҮБӘ ҺҮҘЕ

# БЕР ЭСКЕСЕ ЛӘ...
## балаһы нәфрәтенән ҡотола алмай

**Гәзит биттәрендә айыҡ тормошта йәшәгән, бер ҡасан да алкоголь ҡулланмаған, эскелеккә ҡаршы көрәш алып барған кешеләр менән әңгәмәләр йыш баҫыла. Ләкин ҡасандыр эскелек һаҙлығына батып, тормош мәғәнәһен юғалтып, үлемдән саҡ тороп ҡалып, бөгөнгө көндә айыҡ йәшәү өсөн һәр көнөн көрәшеп үткәргәндәр тураһында һирәк ишетәбеҙ. Был зәхмәттең ни тиклем ҡурҡыныс булыуын, алкоголдең кешене ниндәй сүрәткә индереүен шәхси өлгөһөндә белгән, татыған кешенең әрнеү, һағыш менән тулы, үҙ-үҙенә булған нәфрәт, яҡындарынан ғәфү үтенеү теләге менән һуғарылған һөйләгәндәрен тыңлау күптәргә ғибрәт булыр. Һүҙҙе үҙен ҒӘЛИМӘ тип яҙыуҙы һораған апайға бирәбеҙ.**



- Бөгөнгө көндә алкоголгә ҡағылған һәр бер мәғлүмәттән минең күңелдә нәфрәт уяна, йөрәгем ныҒыраҡ тибә башлай, ҡолағымды ҡаплап, мейемдә тимер ҡоршау менән уратып алып, бар донъянан бикләнгем килә. Мине һыра, араҡы һәм башҡа төрлә алкоголь эсемлектәрҙе рекламалаған һәр һүҙ, һәр яҙыу сығырымдан сығара. Һыра эшләп сығарыусы һәм уны төрлә ысулдар менән йәмғиәткә - олоһона һәм йәшенә, иргеткә һәм ҡатын-ҡыҙға, үсмерҙәргә һәм хатта балаларға - тараҡҡан кешеләрҙең барыһын да бер рәткә теҙеп атып йыҡҡым килә. Подъезда йәки урамда һыра эсеүсе йәштәрҙе күрһәм, уларҙы ниндәй киләсәк көтәсәгеи һөйләп аңлатҡым, йәмғиәттең был проблемаға булған битарафлығынан ҡысҡырып илағым килә.

Ни өсөн? Ни өсөн быларҙың барыһы ла миңә ныҡ тәьҫир итә? Сөнки мин үҙем - элекке эскесе. Элекке эскеселәрҙең булыуына ышанмайым, шуға күрә үҙемдә һәм алкоголдән баш тартҡандарҙы "һауығырға тырышыусы эскеселәр" тип йөрөтәм. Беҙ ғүмеребеҙҙең ахырынаса ошо зәхмәттән йүнәлергә тырышып йәшәйәсәкбеҙ, ошо ҡурҡыныс афәттең әҙемтәләренән ҡотолорға ынтыласаҡбыҙ.

Берәү ҙә эскесе булып тыумай. Мин дә бәхетле ғаиләлә, атай-әсәй наҙына төрөнөп буй еткерҙем, белем алдым, тормош ҡорҙом, өс балаға ғүмер бирҙем. Ләкин араҡы арҡаһында бәхетле тормошома үҙем тәкөрөп, ғүмерлек йөрәк яраһы алдым. Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙең киләсәгебеҙҙе күрә алһаҡ икән! Әгәр ҙә әле бына кемгәлер үпкәләү тойғоһонан йәки ниндәйҙер кәмселек комплексынан һыра шешәһе артына йәшеренеүсе ҡыҙ йылдар үткәс үҙенең бысраҡ иҙәндә, буш шешәләр араһында, ҡоҫҡолоҡ һәм бәүеленә буталып ятыуын күрһә икән! Әгәр ҙә компаниянан айырылмаҫ өсөн генә рюмка күтәргән, дуҫтарының күңелен ҡырмаҫ өсөн генә һыра эскән йәки байрамдарҙа ғына ҡырын тейгән егет егерме-утыҙ йылдан үҙенең эскелек элмәгендә эленеп тороуын күрһә икән! Әгәр ҙә урта йәштәрҙәге, юғары белемле, ҙур ғына урын биләп эшләүсе ханым киләсәккә барып ҡайтыу мөмкинлеге алып, үҙенең "мәҙәни" эсеүенән ниндәй хәлгә төшөүен күрһә икән! Уларҙың барыһы ла алкоголдән тағындан (чума) ҡасҡан ише ҡасырҙар ине. Ләкин бындай мөмкинлек юҡ. Берәү ҙә үҙенең киләсәген һәм унда уны нимә көткәнлеген белә алмай...

Һәм ул эсә. Башта аҙна аҙағында - эшендә, тора-бара стрестан йәки ниндәйҙер күңелһеҙ хәлдә онотоу маҡсатынан- өйҙә, айына бер - ҡунаҡта эсә. Артабан байрамдар һаны арта, эсеү өсөн сәбәптәр ҙә табылып ҡына тора. Мин дә ошо юлды үттем. Ҡупшылап, "мәҙәни эсеү" тип йөрөтөлгән осорҙан сүп-сар һауытында эсеп бөтөлмәгән һыра эҙләүгә тиклем барып еттем. Башта барыһын да контролдә тотҡан һымаҡ инем, ләкин нисек итеп араҡы ҡолона әйләнгәнемде һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Был ваҡытҡа инде алкоголдән айырылыуҙан ныҡ ҡурҡтым. Унһыҙ йәшәп була икәнлегенә ышанманым. Әҙме-күпме спирты булған шыйыҡсаны эсмәгән көндәр миңә буш һәм мәғәнәһеҙ тойола ине. Кемдәндер мине ошондай хәлдә күреүенән тартыныу тойғоһо, оялыу бөтөнләй булмаһа, сөнки араҡы менән тупаҫланған мейегә барыбер ине. Ә кемдән оялырға? Үҙең кеүек үк эскеселәрҙәнме ни? Урамда осраған таныштарҙан ҡасырға, улар күҙенә салынмаҫҡа тырыштым. Әгәр ҙә ҡасып ҡалыу мөмкинлеге булмаһа, алдан уҡ агрессив тәҫ алып, уларҙы урап үттем йәки меҫкен ҡиәфәт менән ҡаршыларына сыҡтым. Дөрөҫөн әйткәндә, тора-бара минең менән осрашырға теләүселәр ҙә ҡалманы. Мине күреү менән үҙҙәре үк урамдың икенсе яғына сығырҙар ине. Уларҙы ғәйепләмәйем һәм бер һүҙ ҙә әйтмәйем. Һәм ғүмерем бөткәнсе әйтмәйәсәкмен...

Эскелек - шешкән йөҙ, һаҫыҡ еҫтәр, эт йәшәмәҫ шарттарҙа көн күреү һәм башҡа "матур"лыҡтар менән үрелеп килеүсе һәм кешене бик тиҙ ялмап алыусы ҡот осҡос ауырыу икәнлеге хаҡында уйлап та ҡараманым. Ә уйларға кәрәк ине. Ҡулыма беренсе рюмканы алған саҡта уҡ. Ләкин тәүҙә барыһы ла һәйбәт кеүек ине. Дуҫтар менән йыйылып, ниндәйҙер байрамды билдәләгәндең икенсе көнөндә үҙебеҙҙең ҡайһы бер мәлдәрҙе иҫләмәҫлек хәлгә еткәнсе эсеүебеҙҙе һөйләп көлә инек. Шунда уҡ үҙебеҙҙең эскеселәр рәтенә баҫҡанлығыбыҙҙы аңларға кәрәк булған да бит. Эйе, ул ваҡытта ҡойма төбендә аунап ятмай инек әле. Ләкин барыһы ла алда булған. Шуға күрә, кем дә кем үҙенең тормошонда ошондай бер-ике ваҡиғаны иҫләй, тимәк ул - эскесе.

Әлбиттә, ошо урында бик күптәр минең һүҙҙәргә йә көлөп ҡарар, йә асыуланыр. Берәү ҙә бындай осраҡтарҙы киләсәген ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған хәл-ваҡиға итеп ҡарамай. Үҙенең әлеге ваҡытта уҡ ауырыу икәнлеген танырға теләмәй. Ул үҙен "Барыһы ла эсә лә инде", тип йыуата, "Кәрәк булһа, шунда уҡ алкоголдән баш тартасаҡмын" тип ышандыра, "Минең менән барыһы ла һәйбәт буласаҡ" тип өмөтләнә. Ләкин күптәр, бик күптәр, был тоҙаҡтан ысҡына алмай һәм яҡындарының ҡайғыһына, оятына әйләнә. Яҡындары эскән атаһына, әсәһенә, балаһына ҡул һелтәмәй, үҙҙәренең тормошон ҡорбан итеп, уларҙы аяҡҡа баҫтырырға, кеше ҡиәфәтенә ҡайтарырға, эскелектән арындырырға тырыша. Тәүҙә улар уның алдаған һүҙҙәренә ышана, йәлләй, хәлен еңеләйтергә тырыша, ләкин ваҡыт үтеү менән был тойғолар нәфрәткә әйләнә.

Был бигерәк тә атай-әсәй һәм балалар миҫалында асыҡ күренә. Әлегә тиклем бер эскесе лә балаһының нәфрәтенән ҡасып ҡотолғаны юҡ. Ләкин эскесе һәр ваҡыт үҙенә аҡлау таба. Ул һәр дөрөҫләккә күҙ йомоп ҡарай, балаһының, яҡындарының күңел һыҙланыуҙарына төкөрөп бирә. Шуға ла илау-һыҡтау, ниндәйҙер ҡурҡытыуҙар ярҙамында кешене эскелектән биҙҙереп була, тип уйлау хата. Мейеһе асылып торған бик һирәк минуттарҙа ул барыһын да аңлағандай, ләкин ышанмағыҙ, әгәр ҙә үҙенең теләге булмаһа, ул араҡынан баш тартмаясаҡ...

### Эскесегә генә хас билдәләр бар

● Эсә башлауҙан һуң бер-нисә йыл үтеүгә, ҡул ҡалтырауы килә. Унан һуң биттең шешмәкләнеүе үҙенең урынын ала. Һыранан имәнес ҡорһаҡ барлыҡҡа килә. Тәндән ҡоҫҡолоҡ еҫе аңҡый башлай. Былар - ҡотолғоһоҙ билдәләр.

● Алкоголь көтә белә. Тағы ла күпмеләр ваҡыт үтеүгә, нервылар системаһы ҡаҡшай. Йоҡо менән бәйле проблемалар килеп тыуа. Шулай уҡ ваҡыты-ваҡыты менән контролдә тотоп булмаған агрессия өйөнәгенән йәки, киреһенсә, идара итә алмаҫлыҡ илаусанлыҡтан яфа сигеү башлана.

● Көндән-көн үҙ-үҙеңә ҡул һалыу тураһындағы уйҙар мейеңдә йышыраҡ бырaулай. Эргәндәге эскесе дуҫтарыңдың көн дә береһенең үлемен күреп,ваҡыты менән төшөнкөлөккә бирелеү, ҡасан да булһа үҙеңдең дә ошондай уҡ имәнес хәлдә үлереңде аңлауҙан ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килә, ләкин сираттағы рюмка уны тиҙ уҡ юйып ташлай.

● Ваҡыт үтә тора, эскелек һаҙлығының төбөнә тәгәрәүҙе дауам итәһең. Берҙән-бер көндә бөтөнләй ят кешеләр урам буйлап мәғәнәһеҙ һөйләнеп йөрөүеңдән ҡурҡып ҡаса. Ләкин был мәғәнәһеҙлекте иҫләмәгәс, оялыу тойғоһо булмай.

● Был ваҡытҡа эсеүеңдә бер кемдән дә йәшермәй башлайһың. Ҡайҙа ҡоялар - һин шунда, кем менән эсеүең дә мөһим түгел, бары тик ауыҙға спирты булған шыйыҡлыҡты ғына ҡойорға. Унан һуң инде үҙеңдең ниндәй хәлдә булыуың да, өҫ-башыңдың бысраҡ булыуы ла, урамда балаларҙың ҡурҡып ҡасыуы ла һиңә барыбер була башлай.

● Тора-бара бер көнөң дә рюмкаһыҙ үтмәй. Тәүҙә сәғәтенә бер рюмка, унан рюмка тулыр-тулмаҫ һалып ауыҙға ҡояһың. Күберәк эсергә теләк бар, ләкин организм түҙмәй- әҙ генә эсһәң дә "һүнә"

✓ *Кемдер үҙен ҡулға алып, тормошон яйға һалырға көс таба, кемдер үлеменә табан тәгәрәүен дауам итә. Мин тәүгеләр рәтендә. Артабанғы тормошом күрһәткән көндәрем өсөн яҡындарымдан ғәфү итеүен һорауға ҡоролған буласаҡ.*



башлайһың. Күҙҙәр ябыҡ булһа ла, һин йоҡламайһың, ләкин башыңды күтәреп, артабан эсергә йәки тороп китергә хәлеңдән килмәй. Ошондай ҡиәфәттә бер аҙ ултырғас, күҙ асыла һәм алда ултырған араҡы ауыҙға оҙатыла. Унан тағы ла 10-15 минутҡа "һүнәһең". "Йоҡо" ваҡытында ауыҙҙан ағып ултырған шайыҡ та, ваҡыты-ваҡыты менән иҙәнгә йәйелгән бәүел дә һине борсомай, сөнки уларҙы күрмәйһең. Күрерлек, аңларлыҡ хәлдә түгелһең. Был хәл көндән-көн, йылдан-йыл ҡабатлана. Был - эскесенең тормошо. Был - минең дә тормошом булды.

● Ләкин ҡайһы берҙә барыһын да аптырауға һалып, эсеүҙән шып туҡтайһың. Оҙайлы эсеүҙән арына башлағас, башҡа бер ҡасан да эсмәйәсәкмен, тип уйлайһың. Минең баштан да үтте былар. Эскән ваҡыттағы ҡылыҡтарым өсөн ныҡ оят була ине. Күпмелер ваҡыт эсмәй торам. Был көндәр ғаиләм өсөн бәхетле ваҡыт булды, сөнки өйҙө таҙартам, айныҡмын, тәмле итеп аштар бешерәм, мейестә тәмлекәстәр өлгөртәм. Ләкин күп тә үтмәй, ныҡ итеп эскем килә башлай. Һәр көн, һәр минут араҡы тураһында ғына уйлайым. Бер көн, ике көн был теләкте еңергә тырышып йәшәйем, тик араҡы көслөрәк булып сыға һәм мин тағы ла шешә ҡосаҡлап аунайым.

● Ошондай мәхшәр тормоштан бер көн килеп тотлоға башланым. Унан беренсе эпилепсик өйәнәк тотто. Ҡурҡышымдан кодировка эшләттем. Был "тегеү" ни бары дүрт айға ғына етте - тағы ла эстем. Өйҙәге әйберҙәрҙе сығарып һатып бөттөм. Бахмурҙан баш сатнаған-да күршеләрҙән аҡса һоранып йөрөнөм. Эсеп бөтөлмәгән һыра эҙләп урамдағы берәҙәктәр менән сүп һауыттарын ҡутарҙым. Мине белгәндәр ерәнеп баштарын борҙо, ләкин ул ваҡытта миңә барыбер ине.

Ҡайһы бер яҡындарым минән баш тартты, ә ҡайһылары был хаҡта хыялланды, ләкин ташлап китергә ҡыйманы. Шулай булһа ла, ошо уйҙары өсөн генә лә мин уларҙы хыянатсылар тип йөрөттөм. Ләкин әле генә мин уларҙың үҙҙәрен минән ҡотҡарырға теләүҙәрен аңланым. Көндән-көн, йылдан-йыл мин уларҙың тормошон бөтөргәнмен, аяуһыҙлыҡ һәм иҫәпселлек менән "үлтергәнмен". Минең эсеүем өсөн үҙем түгел, ә улар түләне. Үҙемдең эсеүем менән мин уларҙың тормошон тамуҡҡа әйләндергәнмен, һаулыҡтарын ҡаҡшатҡанмын, рухи яҡтан һындырғанмын. Улар ҙа минең менән бергә ауырыуға әйләнгән.

Ауырыу аяҡтан йыҡмаһа, был мәхшәр тағы күпме дауам итер ине - белмәйем. Берҙән-бер көндө дауаханала күҙемде астым. Эскелек үҙенекен эшләне - өс ай үҫемлек хәлендә ҡыбырлай ҙа, ашай ҙа, һөйләшә лә алмай яттым. Ләкин эскелектән сөрөшкән мейем генә, нисектер, уйлау ҡеүәһен юғалтмағайны. Ошо ваҡытта тормошомдо уйлап, үҙемә булған нәфрәт тойғоһонан үлер хәлгә еттем. Балаларымдың күҙ йәшенең һәр бөртөгө өсөн иң ҡаты язаға дусар булырға әҙер инем.

Тормошта иң мөһиме - һаулыҡ, тибеҙ. Ләкин минең кеүек эскелекте үҙ иткәндәргә ҡаты сир был зихмәттән ҡотолоу өсөн берҙән-бер юлдыр ул, сөнки үлем менән йәшәү араһында ҡалғанда ғына яҡты донъяның матурлығын аңларға мөмкин. Миңә эскелектән ҡотолорға нәҡ ауырыу ярҙам итте. Дауаханала уҙғарған өс айым миңә аяҡҡа баҫырға, тормошомдо яңы биттән башларға мөмкинлек бирҙе.

Ғүмерлеккә эскелектән ҡотолоу өсөн һуҙылған рюмканан баш тартыу ғына етмәй, ә тәү сиратта, эске сифаттарың өҫтөндә эшләү талап ителә. Үҙеңдең әлеге ваҡыттағы торошоң хаҡындағы дөрөҫлөктө аңлау, ҡабул итеү һәм уны ҡаты тәнҡитләү генә был ауырыуҙан йүнәлеү өсөн юл аса. Ләкин нәҡ ошо дөрөҫлөктө аңларға тырышыуҙан ҡурҡа һәр эскесе. Кеше буш урында эскесегә әйләнмәй - уның бушаҡ эске үҙәге ошондай хәлгә төшөрә, рухи яҡтан йомшаҡ булыуы эт тормошона алып килә. Шуға күрә, кемдер үҙен ҡулға алып, тормошон яйға һалырға көс таба, кемдер үлеменә табан тәгәрәүен дауам итә. Мин тәүгеләр рәтендә. Артабанғы тормошом күрһәткән ҡара көндәрем өсөн яҡындарымдан ярлыҡау алыу, уларҙың ғәфү итеүен һорауға ҡоролған ғүмер буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был һүҙҙәрҙән һуң нимәлер өҫтәү кәрәкмәйҙер, тип уйлайым. Һәр кем һығымтаны үҙе эшләр. Ләкин Ғәлимә апайҙың һөйләгәндәренән ғибрәт алып, үҙен эскелектән һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген тапҡандар артһа, тимәк, ул йөрәк яраларын ҡуҙғатып, бушҡа хәбәр һөйләмәгән.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА тыңланы.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




## Яҙмыш. Һайланғанмы, әллә маңлайға яҙылғанмы?

Дуҫым миңә:

- Һин, Алла һәр әйберҙең яҙмышын, беҙҙең эштәребеҙҙе алдан билдәләгән, тиһең. Ул саҡта мин, теләһәм-теләмәһәм дә, бөтәһен дә эшләргә тейешмен булып килеп сығамы? Әгәр шулай икән, ниңә Ул бының өсөн язаһын бирә? Фекеремде дауам итәм: был яҡты донъяға тыуыу йәки тыумау, милләтте, буйҙы, йыуанлыҡты, тәндең төҫөн, тыуған илде һайлау минең ихтыярымдамы ни? Ай менән ҡояштың сығыуы һәм байыуы миңә бәйлеме ни? Яҙмыш, үлем, ауырыуҙар минең теләгем буйынса бирелгәнме? Тәҡдир бөтәһен дә алдан билдәләгәс, мин ғәйеплеме? Ни өсөн ул саҡта Алла хөкөм итә? Йәмғиәттең, дәүерҙең кешелеккә йоғонтоһо, философ-материалистар һөйләгән тарихи ҡотолғоһоҙлоҡ хаҡында ни тиерһең?

Быларҙың барыһын да бер тынала теҙеп һалып, дуҫым мине "үлтерҙем", хәҙер "күмеп" ҡуяһы ғына ҡалды, тип уйланы, буғай. Мин уға тыныс ҡына яуап бирҙем:

- Һин софистикаға бирелгәнһең. Һинең эштәрең, һис шикһеҙ, Аллаға билдәле һәм Уның кенәгәһендә яҙылған, ләкин был Ул һине мәжбүр итә, тигән һүҙ түгел. Ысынында иһә, бар эштәрең Уның ғилемендә генә билдәләнгән. Азатлыҡты уйлап сығарылған тип әйтеүең һәм быны һиңә тыуыу, милләт, оҙонлоҡ, йыуанлыҡты һайлау хоҡуғы бирелмәүе һәм Ҡояшҡа, Айға идара итә алмауың менән иҫбатлауың - һинең икенсе хатаң. Сөнки азатлыҡты һин беҙ, дингә ышаныусылар, кеүек күҙ алдына килтермәйһең. Һин абсолют азатлыҡ тураһында һөйләйһең. Йыһан тик бер Аллаға ғына буйһона, Ҡөрьәндә әйтелгәнсә: "Бөтә нәмә Хоҙай ҡулында". Аллаһы Тәғәлә һине тәпәш булғаның өсөн язаламай, оҙон булған өсөн ғәйепләмәй. Был яҡтан һин теләһәң-теләмәһәң дә Аллаға буйһонаһың, үҙең һайлай алмайһың.

Беҙҙең дискуссия темаһы - һинең иркеңдә булған һәм үҙең яуаплы булған бурыстарың. Һин нәфсеңде тыя, асыуыңды йүгәнләй, күңелең менән көрәшә, әшәке ниәттәреңде баҫтыра, ә яҡшы уйҙарыңды хуплай алаһың. Үҙ милкеңде, үҙеңде ҡорбан итергә иркле. Дөрөҫөн йәки ялған һөйләү, тыйылғанға теймәү - һинең ихтыярыңда. Телеңде әшәке һүҙҙәрҙән, ләстит, ғәйбәттән тыя алаһың. Был мәсьәләләрҙә беҙ иркле, һәм быларҙың бөтәһе өсөн дә яуап бирәсәкбеҙ.

Кешенең ошо әйтеп үткән бурыстар мәсьәләһендәге ирке абсолют түгел, ә шартлы ирекле. Был ысын азатлыҡ, һәм күңелебеҙ менән уны тәбиғи тойоуыбыҙ быны раҫлай. Беҙ яуаплылыҡ тоябыҙ һәм хаталарыбыҙ өсөн үкенәбеҙ, изгелек эшләһәк, рәхәтлек тоябыҙ. Күп һанлы мөмкинлектәрҙе үлсәп ҡарап, беҙ минут һайын һайланабыҙ, сөнки аҡылыбыҙҙың иң беренсе бурысы - өҫтөн булғанды һайлау.

Үҙ йөрәгеңдә оҡшамаған нәмәне яратырға бер нисек тә мәжбүр итеп булмау ҙа ошо азатлыҡты раҫлай. Әйтәйек, ҡатынды ҡурҡытып, туҡмап сисендерергә мәжбүр итеп була, ләкин бер ниндәй көс тә уны яраттырырға мәжбүр итә алмай. Быныӊ асылы - Аллаһы Тәғәлә йөрәктәребеҙҙе төрлө көсләүҙәрҙән һәм мәжбүр итеүҙәрҙән азат иткән. Шуға күрә Хаҡ Тәғәлә хөкөм нигеҙе итеп йөрәкте һәм уның ниәттәрен яһаған. Язалау ҡурҡынысы аҫтында диндән баш тартҡан диндарға бер ниндәй ҙә яза булмаясаҡ, сөнки уның йөрәге динһеҙлектән һәм шикләнеүҙәрҙән таҙа. Кешенең ирке Алла ихтыярынан аша алмай. Ул ҡайһы берҙә Аллаға оҡшамаған эштәр ҡыла, ләкин Уның ихтыярына ҡаршы бер ни ҙә эшләй алмай. Бында кешенең шартлы азатлығының икенсе яғы күренә лә инде. Бөтә ҡылған ғәмәлдәребеҙ, ҡайһы берҙә Алла ризалығынан тыш һәм шәриғәт закондарына ҡаршы булһа ла, Уның ихтыяры буйынса яһала.

Хатаның өсөнсө яғы - яҙмыш, тәҡдир һәм һайлау ирке булмауы тураһында һүҙ күтәргән ҡайһы берәүҙәр уны, кешенең ғәҙәттәрен, һәләттәрен, тәбиғи талаптарын иҫәпкә алмайынса, кешегә көсләп тағыла тип аңлауында. Юҡ, Алла бер кемде лә көсләмәй. Теләгендә булһа, Аллаһы Тәғәлә барыһын да хаҡ юлға ҡайтарыр ине. Ләкин Уның яғынан мәжбүр итеү, көсләү юҡ. Алла һәр кешенең яҙмышын рухи ынтылыштарына, аҡыл һәләттәренә ярашлы билдәләгән. Алла һәр кемгә, шөғөлөнә һәм ынтылыштарына бәйле, уйҙарының тормошҡа ашыуын теләй. Һәр кемдең яҙмышын ниәттәренә тап килгән юлдан йүнәлтә: әгәр ниәттәре изге булһа - яҡшы юлдан, яуыз булһа - насар юлдан. Был ике йөҙлө булмауҙы белдерә.

Кеше яҙмышы - даими дәүмәл түгел, ә шартлы: ул шарттарға ҡарап үҙгәреүе мөмкин. Кеше үҙ ирке сиктәрен белем ярҙамында киңәйтә ала. Тирә-яҡ мөхитте өйрәнеп, уның өҫтөнән хакимлыҡ итә, уны файҙалана ала. Әҙәм эҫене, һыуыҡты, ҡараңғылыҡты еңергә, иҫ китмәле бейеклектәргә күтәрелергә өйрәнгән. Белем - ул бығауҙан ҡотолоу ысулы, азатлыҡҡа ирек биреү мөмкинлеге. Әммә азатлыҡ сиктәрен киңәйтеүҙең төп сараһы - дин тотоу. Аллаға яҡынлашып ҡына кешеләр ҙур азатлыҡ ала, Унан асыш һәм ярҙам ала. Ысынында белем - ул Алланан бүләк.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Перспективалы күҙаллау: нимә күрәһегеҙ, шуға ғына өлгәшә аласаҡһығыҙ**

Перспективалы күҙаллау ҡайҙан барлыҡҡа килә? Лайыҡлы киләсәкте күрә белеү өсөн - ә был йоғонтоло лидер өсөн алмаштырып булмаған сифат - һеҙ бер нисә тауышты тыңларға өйрәнергә тейешһегеҙ:

Эске тауыш. Перспективалы күҙаллау эстән - булмыштан килә, тигәйнек инде. Һеҙгә үҙегеҙҙең тормош миссиягыҙҙың ниндәй булыуы билдәлеме? Йөрәгегеҙҙе нимә тулҡынланырға мәжбүр итә? Нимә тураһында хыялланаһығыҙ? Әгәр тормош маҡсатығыҙ күңел төпкөлөнән килән эске теләк менән дәртләндерелмәй икән, маҡсатығыҙға өлгәшә алмаясаҡһығыҙ.

Ҡәнәғәтһеҙлек тауышы. Бөйөк идеяларҙы тормошҡа ашырыуға этәреүсе илһам ҡайҙа тыуа? Кемдер ҡайҙалыр ниндәйҙер нәмәнең эшләмәгәнен күргән ерҙә. Ошо ваҡыттағы хәлторош менән ҡәнәғәтһеҙлек - перспективалы күҙаллауҙың бөйөк катализаторы. Булғаны менән ҡәнәғәтләнеп, тормош буйынса автопилотта хәрәкәт итәһегеҙме? Әллә тормошто үҙгәртергә ҡулығыҙ ҡысып торамы? Кешелек тарихындағы бөйөк лидерҙарҙың береһе лә үҙгәрештәргә ҡаршы көрәшмәгән.

Уңышлы тауыш. Бер кем дә бөйөк эштәрҙе яңғыҙы башҡара алмай. Бөйөк хыялды тормошҡа ашырыу өсөн һеҙ яҡшы командаға, шулай уҡ лидерлыҡ буйынса сәйәхәттә һеҙҙе уҙып киткән кешенең яҡшы кәңәшенә лә мохтажһығыҙ. Әгәр ниндәйҙер бөйөк эшкә артығыҙҙан башҡаларҙы эйәртергә теләһәгеҙ, мотлаҡ рәүештә үҙегеҙгә остаз табығыҙ.

Юғары тауыш. Ысын мәғәнәһендә ҡиммәтле күҙаллау Аллаһы Тәғәләнән булырға тейеш. Бары тик уға ғына һеҙҙең һәләттәрегеҙ күренә. Перспективалы күҙаллауығыҙ менән шөғөлләнгәндә үҙегеҙҙән өҫкәрәк, фани донъянан, хатта ваҡыттан юғарыраҡ күҙ һалғанығыҙ бармы? Юҡ икән, ысын ҡеүәтегеҙҙе тулыһынса файҙаланмайынса, тормош биргән иң яҡшы нәмәне ҡулдан ысҡындырыуығыҙ ихтимал.

**Өйгә эш. Перспективалы күҙаллауығыҙҙы яҡшыртыр, камиллаштырыр өсөн түбәндәгесә эшләгеҙ:**

● Үҙегеҙҙе баһалағыҙ. Әгәр элек тә тормошоғоҙҙоң перспективалы хыялы тураһында уйлаһығыҙ һәм уны асыҡ, аныҡ формалаштырһағыҙ, уны нисек тормошҡа ашырыуығыҙҙы баһалағыҙ. Быныӊ өсөн йоғонтоло булған бер нисә кеше - тормош иптәшегеҙ, дуҫығыҙ, хөрмәт иткән коллегағыҙ - менән үҙегеҙҙең бөйөк хыялығыҙҙы уларҙың нимәлә күреүе һәм нимә уйлауҙары тураһында һөйләшегеҙ

● Хыялығыҙҙы ҡағыҙға яҙығыҙ. Әгәр перспективалы күҙаллауығыҙ тураһында уйланып та, уны бер ваҡытта ла ҡағыҙға төшөрмәһәгеҙ, бөгөн үк быны эшләгеҙ. Яҙып бөткәс, был хыялдың тормошғоҙҙа иң яҡшы һәм мөһим эш була аламы икәнлеген баһалағыҙ.

● Барыһын да эске кимәлдә тикшерегеҙ. Ошо йәһәттән тәрән уйланыуҙарға бирелегеҙ. Нимә һеҙҙе иларға, хыялланырға мәжбүр итә? Нимә энергия бирә? Шулай уҡ урап алған мөхитегеҙҙә нимәне үҙгәртергә теләүегеҙ тураһында ла уйлағыҙ. Идеяларығыҙ асыҡлана башлау менән, уларҙы ҡағыҙға төшөрөгөҙ һәм остазығыҙ менән һөйләшегеҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 24 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
